МАУК «Мелеузовская централизованная библиотечная система»
Городская библиотека - филиал им. М. Бурангулова

# Лучезарно сияющее творчество

## Жизнь и творчество поэтессы Н. Аюповой

# Дайджест



# Нурланып балҡыған ижад

## Ижадсы Н. Әйүпованың тормошо һәм ижады

Мелеуз 2020

**Лучезарно сияющее творчество : дайджест / сост. Н. Исхакова. - Текст : непосредственный. - Городская библиотека - филиал им. М. Бурангулова. - 2020. - 70 с.**

# К читателю

История родного края неразрывно связана с жизнью людей. Именно они создают историю, вносят свой личный вклад в развитие общества. Много таких замечательных людей проживает и в нашем городе Мелеуз. Творчество поэтов - земляков – одна из ярких, глубоко волнующих страниц местной поэзии, наполненных любовью к людям, к неброской красоте родной земли, проникнутых добротой, искренностью, чувством постоянного беспокойства за судьбу земляков.

К великому прискорбию 18 февраля 2020 года скоротечно оборвалась жизнь Наили Габдулловны, радовавшей нас своим творчеством.

Родилась Наиля Аюпова 19 октября 1949 года в д. Нимеслярово Нуримановского района. После окончания средней школы она уезжает в г. Уфу, учится на водителя трамвая, затем работает. Создав семью, с любимым человеком уезжают в далекую Бухару на целых 13 лет, но в 1985 году вынуждены были все же вернуться в родной Башкортостан, ближе к матери, проживавшей к этому времени в г. Мелеуз. Наиля Габдулловна много лет проработала в строительном тресте «Ишимбайжилстрой», начав трудовую биографию штукатуром - маляром, отделочницей, затем около двух десятков лет возглавляла профком треста, защищала интересы тружеников. После ухода на пенсию ее неугомонная душа не находила покоя, она нашла себя в поэзии. На сегодняшний день Наиля Аюпова автор 3-х сборников стихотворений - «Душа женщины» (2005), «Яблони, цветущие осенью» (2009), «Выпускаю птиц своих весной» (2014). Ее творчество стало популярным и в среде артистов эстрады Башкортостана Азамата Кильметова, Зили Усмановой, Флюры Узянбаевой, Флёры Шариповой.

Дайджест «Лучезарно сияющее творчество» призван познакомить и взрослых, и молодое поколение нашего города с жизнью и творчеством Наили Габдулловны Аюповой - поэтессы, доброго и отзывчего человека.

Публикации видных журналистов Башкортостана, коллег и земляков Наили Аюповой, собраные из статей местных, республиканских газет и журналов на русском, башкирском и татарском языках найдут отражение в 4-х разделах дайджеста : «Жизнь, достойная песни» - «Йырға тигеҙ тормош» - в этом разделе собраны публикации биографического характера; «Талант, заложенный Природой» - «Тәбиғәттән килгән был талант...» - здесь читатель ознакомится с публикациями о поэтическом творчестве Наили Габдулловны; в разделе «Навсегда оталась в наших сердцах» - «Күңелдәрҙә ҡалды үрелеп» расположены публикации, посвященные памяти поэтессы Наили Аюповой; памятные фотографии с известными поэтами, писателями и общественными деятелями можно будеть посмотреть в разделе «Мгновения жизни» - «Ғүмер миҙгелдәрең - хәтирә».

В разделах дайджеста публикации располагаются по алфавиту.

# Уҡыусыға

Беҙҙең Мәләүез яҡтары тәбиғәте менән генә түгел, күркәм холҡлы, ихлас йөҙлө ижадсылары менән дә матур.

Донъя йәмен, матурлыҡты тоя, күрә белгән Наилә Әйүпова-Рәжәпованың шиғырҙарын күптәр яратып уҡый.

Үкенескә ҡаршы 2020 йылдың 18 февралендә кинәт кенә Наилә апайыбыҙ донъя ҡуйҙы.

Наилә Ғабдулла ҡыҙы тыумышы менән Нуриман районы Нимесләр ауылынан. Ғүмеренең күп өлөшө Мәләүез ерендә үткән, ерлектәге халыҡты яратып, хеҙмәтен дә төбәк үҫешенә бағышлаған. Хаҡлы ялға сыҡҡас Наилә Әйүпова - Рәжәпова баш - көллө ижадҡа сумған. Бала саҡтан бөгөнгәсә йөрәгендә йөрөткән хистәр өс китап булып тупланған. «Ҡатын - ҡыҙ күңеле» (2005), «Алмағасым көҙөн сәскә атты» (2009), «Яҙҙарыма ҡош осорҙом» (2015) - тип атала улар.

Ижадсы Наилә Әйүповаға арнап М.Буранғолов исемендәге 1-се һанлы ҡала китапханаһы «Нурланып балҡыған ижад» исемле дайджест әҙерләне.

Китапхананың фонды һәм библиографик белешмәләр аппараты буйынса әҙерләнгән дайджестта Башҡортостан матбуғатында башҡорт, татар, рус телендә баҫылған мәҡәләләр тупланды.

Дайджест дүрт бүлектән тора. Беренсе «Йырға тигеҙ тормош» бүлегендә Наилә Ғабдулла ҡыҙының биографик белешмәләре сағылды. Икенсе бүлек - «Тәбиғәттән килгән был талант...» шағирәнең ижадын асып бирә. Өсөнсө бүлеккә - «Мәңгелеккә ҡалыр үрелеп» Мәләүез ҡалаһы ижадсыларының хәтер сәхифәләре тупланды. Иҫтәлекле фоталар менән танышыу өсөн «Ғүмер миҙгелдәрең - хәтирә» исемле бүлек булдырылды.

Дайджесттағы материалдар автор һәм мәҡәләләр алфавиты буйынса башҡорт, татар, рус телдәрендә төҙөлдө.

Дайджест әҙәбиәт белгестәренә, шиғриәт һөйөүселәренә, уҡытыусыларға, студенттарға, уҡыусыларға тәғәйенләнә.

# Жизнь, достойная песни
# Йырға тигеҙ тормош



1. **Булатова, Әлиә. Шиғырҙарым минең серҙәштәрем... / Ә. Булатова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2014. - 18 октябрь. - Б. 2.**

Наилә Әйүпова - Рәжәпованың исеме күптәргә таныш. Ул - ижад кешеһе, хис - тойғоло шиғриәт донъяһында канатланып, ҡаурый - ҡәләмен тибрәтеп, күңел һарайында һаҡланған тәрән уй - кисерештәрен аҡ ҡағыҙға төшөрә. Йөрәгенән сыҡкан ялҡын унын бөтә булмышын, эске донъяһын сағылдыра.

Наилә Ғабдулла ҡыҙы тыумышы менән Нуриман районы Нимеслэр ауылынан. Ғүмеренең күп өлөшө Мәләүез ерендә үткән, ерлектәге халыкты ярата, хеҙмәтен дә төбәк үҫешенә бағышлаған. Күп балалы ғаиләлә тыуған Наилә эшкә бөтмөр, уңған, тырыш булып үҫә.

- Ни ҡушһалар, шуны үтәнек. Бәләкәй ваҡытта киң, озон урамдан күнәкләп һыу ташығаныбыҙ иҫтә. Ҡасандыр йөрөгән һуҡмаҡ, тыҡрыҡтарҙың

бөгөн бәләкәсәйеп ҡалғанына хайран ҡалам. Ҡолас етмәҫлек ихаталар тарайған. Атайым уҡытыусы ине. Көн һайын эш араһында беҙгә шиғыр ятлата торғайны. Һаҙи Таҡташ, Ғабдулла Туҡай, Мәжит Ғафури әҫәрҙәрендә тәрбиәләндем. Шиғриәткә һөйөүем шунан башланғандыр тип уйлайым, үҙем да ара-тирә һыҙмаҡлай инем. Төплө итеп, бирелеп 50 йәшемә генә яҙыша башланым, - ти әҙәбиәт һөйеүсе әңгәмәсем.

Өс йыл буйы һөйгән егете Рәсүлде армиянан көтөп алғас, гөрләтеп туй яһап, матур тормош ҡороп ебәрәләр. Яҙмыш еле уларҙы Үзбәкстан яҡтарында ла йөрөтә. Халыҡ әйтмешләй, сит ерҙә солтан булғансы, үҙ ереңдә олтан бул тип, күңелдәре Башҡортостанға тартыла. Мәләүездә йорт һалалар, береһенән - береһе һылыу, аҡыллы, тәрбиәле Гүзәл менән Ирина исемле ҡыҙҙар үҫтерәләр. Наилә Әйүпова-Рәжәпова үҙ ғаиләһен бик ярата, уларҙан да яҡын, ҡәҙерле кеше юҡ донъяла. Ҡыуанысын арттырып Альберт, Руслан ейәндәре, Яна, Юлиә ейәнсәрҙәре үҫеп килә. Әйткәндәй, Руслан Ғәлиев - спорт кандидаты. Балаларын яҙмыш бүләге, илһам шишмәләре, тип иҫәпләй шағирә.Улар йылылыҡ, нур бөрккән, тәмле аш-һыу еҫе менән арбаған әсәй, атай йортона ашҡынып ҡайта. Наилә апайҙың бөхтә донъяһына йәм, ҡот өҫтәп, күҙҙең яуын алырҙай гөл - сәскәләре күпереп ултыра. Йәй айҙарында ишек алды, баҡсаһы әкиәти серле донъяға әүерелә. Матур күңелле кешеләр генә матурлыҡты тыуҙыра беләләр.



Кешелекле, изгелекле, ярҙамсыл Наилә Ғабдулла ҡыҙы хаҡлы ялда булһа ла, элекке хеҙмәттәштәре, дуҫтары уны онотмай. Байтаҡ йылдар дауамында ул «Ишембай торлаҡ төҙөлөшө» тресының Мәләүез төҙөлөш идаралығында профсоюз ойошмаһы рәйесе йөгөн тарта, күптәр уның

ярҙамын тойоп эшләй. Эшселәрҙең талантын күргән һиҙгер күңелле Наилә апай улар менән төрлө саралар үткәрә, рухтарын үҫтерә.

Ижад кешеһе өсөн бигерәк тә үҙ кисерештәре, уйланыуҙары мөһим. Ул ябай кешегә хас булмаған һәләткә эйә, донъяның серҙәрен сисә, асылына төшөнә. Төрлө сиктәрҙең йылыһын, һалҡынын, уларҙың бәндә күңеленә тойғоһон нескә тоя, кисерештәрен ҡағыҙға һала һәм шунан кинәнес ала.

Ниндәй генә хәлдәрҙә лә Наилә Ғабдулла ҡыҙының дөрөҫ, ыңғай юл таба белеүе, эске интеллигентлығы һоҡландыра. Уның булмышында Әсә, Ҡатын, Шағирә асылдары бөтәһе бер бөтөн булып йәшәй.

Бөгөн Наилә апайға 65 йәш тула. Һис кенә лә уға үҙ йәшен биреү мөмкин түгел. Балҡып торған карашы, йөҙө, нәфис буйһыны уны йәшәртә. Ошо көндәрҙә уның «Яҙҙарыма ҡош осорҙом» исемле өсөнсө китабы донъя күрҙе. Унда авторҙың бала саҡ хәтирәләре, тыуған еренә, атай - әсәһенә, ҡояшлы көненә рәхмәте, теләктәре, тормошҡа һөйөүе тупланған.

Донъя йәмен, матурлыҡты тоя, күрә белгән Наилә Әйүпова-Рәжәпованың шиғырҙарын күптәр яратып уҡый. Ижади эштәре республикабыҙҙың «Ҡыҙыл таң», «Өмөт», районыбыҙҙың «Көнгәк» гәзиттәрендә, «Ағиҙел» журналында баҫыла.

Көҙгө муллыҡ мәлендә тыуған Наилә Ғабдулла ҡыҙына артабан да ижади үрҙәр яуларға насип булһын.

**Серҙәшем**

Кем өсөндөр шиғыр - шиғыр ғына,
Кем өсөндөр бары шөғөл генә,
Миең өсөн шиғыр - серҙәшем,
Тормош иптәшемдең көндәше.
Төн йоҡомдо булеп шиғыр яҙам
Онотолмаһын, тиеп, һүҙҙәре,
Бер файҙаһыҙ, бер сығымһыҙ шөгөл,
Йыуата ла үҙе, илата ла,
Томан ҡаплай ҡай саҡ күҙҙәремде.
Серҙәшемә һөйләйем серемде

Сабыр тыңлай шиғыр һүҙҙәремде,
Йыуата ла үҙе, илата ла,
Томан ҡаплай ҡай саҡ күҙҙәремде.
Серҙәшем бар, шуға күңелем шат,
Өмөт менән икәү йәшәйбеҙ.
Йәштәр кеүек ул да һикерә алмай,
Икебеҙҙең уртаҡ йәшебеҙ.

**Күңелем йәш  - йәшел саған**

Күңелем йәш - йәшел саған
Өҫтәлемдә икмәк, тоҙом,
Усағымда көйрәй куҙым,
Йәшәүемдең сығанағы -
Яҙмышымдың куҙғалағы.
Орлоҡтары ҡойолмаған,
Үтәһе юл уҙылмаған,
Юл алғанмын - юлым булыр,
Якты юлдан күңел тулыр.
Үҙ илемдән айырылмам,
Ҡанаттарым ҡайырылмаҫ,
Иле барҙың - булыр көнө
Йондоҙ күрер булыр төнө.
Өҫтәлемдә икмәк, тоҙом,
Усаҡ көйрәй, һүнмәй ҡуҙым,
Үҙ усағым йылы бирә,
Куҙғалағым орлоҡ тирә
Орлоҡтары оса ҡырға,
Күңел ҡырым зирәк йырға,
Ҡуҙым тере, усаҡ яғам,
Күңелем йәш - йәшел саған.

**Яратам һине, тормош!**

Яратам һине, тормош
Алһыу таңдарың өсөн.
Һине биҙәргә теләйем
Етә алһа инде көсөм.
Яратам һине, тормош
Йондоҙло төнөң өсон.

Донъяға хәрәкәт биргән
Хәйерле көнөң өсөн.
Яратам һине, тормош
Килгән яҙҙарың өсөн.
Күктәге айың, ҡояшың,
Иркә наҙҙарың өсөн.
Яратам һине, тормош
Аҡ томандарың өсөн.
Йөрәк йылыһын ҡыҙғанмаҫ
Дуҫ, туғандарым өсөп.
Яратам һине, тормош
Сәскәле йәйең өсөн.
Йән-тәнемә шифа биргән
Үләнле сәйең, өсөн.
Яратам һине, тормош
Ҡояшлы көнөң өсөн.
Биҙәргә ине һине лә,
Етә алһа инде көсөм.

2. **Бәхетлемен һиндә тыуғанға...: ҡаурый ҡәләм. - Текст : туранан - тура // Нур иман. - 2013. - № 6 (95). - Б. 3.**

Наилә апай Әюпованың шиғырҙарын тәү тапҡыр Байгилде ауыл лицейында үткән З. Нәсибуллин исемендәге нәфис оҫталарының район бәйгеһендә ишеттем. Быға тиклем яҡташ шағирәмде белмәй йөрөгәнемдән бик оялған инем шунда. Китапхананан уның шиғыр йыйынтыҡтарын алып, ҡат-ҡат уҡып сыҡтым. Уның гүзәллекте күрә белеүе, күңел киңлеге, хистәр байлығы менән һуғарылған, кешелек донъяһын изгелеккә өндәгән үҙенсәлекле шиғырҙары таң ҡалдырҙы.

Наилә Ғабдулла ҡыҙы Әюпова 1949 йылдың 19 октябрендә Нимесләр ауылында, уҡытыусылар ғаиләһендә донъяға килә. Туған ауылындағы мәктәпте бөткәс, Өфө ҡалаһының уҡыу йорттарының береһендә трамвай йөрөтөүсе һөнәрен үҙләштерә. Был һөйкөмлө ханымға ҡарап, уның ҡасандыр «ҡорос атты» «эйәрләп» алыуына ышаныуы ла ҡыйын әлбиттә. Тормош иптәше, Бүздәк районы егете Рәсүл Әюпов менән өйләнешкәс улар, ҡыҙҙары

Гүзәлде алып, Үзбәкстанға Бохара калаһына сығып китәләр. Сит ерҙәрҙә ун өс йыл йәшәгәндән һуң, Әюповтар туған яҡтарынаг ҡайтып, Мәләүез ҡалаһында төпләнәләр, яңы йорт һалып инәләр. Унған, егәрле Наилә апай йәшәгән ерен гөл - сәскәләргә күмгән.

Ун ете йыл Наилә апай төҙөлөш идаралығында профсоюз ойошмаһы рәйесе булып эшләй. Тыштан йомшак күңелле күренһә лә, үҙәге ҡоростай ныҡ Наилә апайҙың. 2002 йылда Наилә Әюпова хаҡлы ялға сыға. Ошо мәлдән уның, тормош дәфтәренең өр - яңы бите асыла, әүҙем яҙыша башлауы менән ул үҙенең тормошон тағы ла байытып ебәрә. Күңел түренән сыҡкан шиғырҙары менән һәр нимәгә үҙ ҡарашын белдерә, ғәмһез булмаҫҡа өндәй. Наилә апайҙың әйтер һүҙе күп, сөнки ул тормош ауырлыҡтарын күп күргән, төрлө һынауҙар үткән, балалар үҫтергән, ҙур тәжрибә туплаған. Шағирә бөтә кисерештәрен, күргәндәрен йөрәге аша үткәрә, уйлана, туған еребеҙҙең киләсәге өсөн борсола. Ысынлап та, уның, тыңғыһыҙ нескә күңеле бөтә хәл - ваҡиғаны, ғәзелһеҙлекте яҡын ҡабул итә, һыҙлана, тулҡынлана. Наилә апайҙың бик күп шиғырҙары туғандарына, балаларына, тормош иптәшенә булған мөнәсәбәт, оло мөхәббәт менән һуғарылған. Тормош иптәше Рәсүл ағай менән улар ике ҡыҙ тәрбиәләп үҫтерәләр, икеһенә лә юғары белем алырға ярҙам итәләр. Ике ейәне, ике ейәнсәре бөгөнгө көндә уларҙың ҙур һөйөнөсө, тормоштарының биҙәге.

Киләсәктә был ихлас күңелле, сабыр, яҡташ шағирәбеҙ яңынан-яңы ижад емештәрен беҙҙең менән дә бүлешер тигән өмөттәбеҙ. «Нур Иман» гәзитен уҡыусыларға Наилә Әюпованың 2005 йылда «Ҡатын - ҡыҙ күңеле», 2009 йылда донъя күргән «Аллмағастар көҙөн сәскә атты» тип исемләнгән шиғыр йыынтыҡтарына ингән шиғырҙарын тәҡдим итәбеҙ:

**Тыуған аулым - күлдәр иле**

Тыуған аулым минең - күлдер иле
Йомшаҡ елдәр иҫә кистәрен,
Томбойоҡло «Билгеләр» күлендә
Аҡҡоштар һөйләй хистәрен.

Ауылымдың йәме - «Мәсет» күле
Йомшаҡ унын тоноҡ һыуҙары,
Баҫмаһына баҫып йыр һуҙалар
Килендәре, сибәр ҡыҙҙары.
Ауыл уртаһында йәйрәп ята
Балыҡҡа бай ете - «Оло күл»,
Тирә-яғы урман, сәскә, гөлдәр
Матурлығын үҙең барып күр.
Ауылымдың оло ғорурлығы
«Упҡан» күле ята ялтырап,
Курорттары кәрәк түгел, тиҙәр
Ситтәр килә унда ял һорап
Кариҙелем борғаланып аға
Ярҙарында хәтфә болондар,
Унда йүгереп бесән йыя инек,
Сабышалар ине ҡолондар.
Аҡ яулыҡлы ауылым апайҙары
Эй, моңло ла йырлайҙар ине,
Ағайҙарҙын, салғы тауыштары
Болон йәмләп сыңлайҙар ине.
Урманында уш китәрлек байлыҡ
Ҡурай еләк үҫә, бөрлөгән,
Балан, муйыл йыйып бөтөргеһеҙ,
Ҡарағат та үҫкән бер тигән.
Ташлы тауы, сәтләүек урманы
Ситтән сәләм бирә хөрмәтләп,
Тәгәрәшеп еләк йыя һаман
Ғәзиз бала сағым имгәкләп.
Туған яҡтың гүзәллеген, йәмен
Мөмкин түгел яҙып аңлатыу,
Минең уйым - ябай ҡәләм менән
Күңел хисен бер аҙ яңыртыу.
Бәхетлемен һиндә тыуғанға
Башҡортостанда ғорур йәшәйем
Һөйләйем, яҙам үҙ телемдә.
Хазинанан ҡиммәт изге ерҙә,
Гүзәл тәбиғәтле илемдә.

***
Донъя картаһында ул кескенә
Саған япрағына оҡшаған
Күҙ күреме етмәҫ Уралымда
Ниндәй генә ҡоштар осмаған.
Хәтфә болон, күкһел тауҙары ла,
Сылтрап аҡкан көмөш шишмәләр,
Ҡояш менән ҡыҫып ҡыҫышып, көлөп,
Серле мөхәббәтен сисәләр.
Башҡортостанда иң ҙур байлыҡ
Күп милләтле, ҙур, киң күңелле,
Кешелекле һәм дә кеселекле,
Ғорур халыҡ йәшәй түгелме?
Башҡорт, татар, рус, сыуаш, марый,
Данлап берҙәм йәшәй илендә.
Һәр милләттең сикһеҙ ғорурлығы -
Һәр кем һөйләй туған телендә.
Рәхмәтлемен һиндә тыуғаныма,
Һиндә йәшәүемә һөйөнәм.
Һиңә оҡшаш башҡа бер ил юҡтыр
Башҡортостан, илем, һин генәм,
Көс-ҡеүәтле ерем, бергенәм!

**Даһилығың мәңгелек булһын**

Йәшәү насип булды сит ерҙәрҙә,
Йәшлегемдә йыраҡ илдәрҙә.
Тыуған илем, ҡайтып йылы алдым
Күңелем өшөгәндә елдәрҙә.
Мул тормошта ситтә йәшәһәм дә,
Күңелемдә һәр саҡ һин инең-
Татлы төшөмә тик һин индең
Изгеләрҙән - изге һин, илем.
Бер ерҙә лә һиңә тиңдәр юҡтыр,
Халҡың сибәр,тыныс донъялар.
Ожмахтарға тиңдер тәбиғәте,
Былдай муллыҡ, әйтсе, ҡайҙа бар?
Үҙемдеке минең тыуған илдә,
Һәр һуҡмағым, эсәр һыуҙарым.

Ҡара икмәгем дә ғәзиз миңә,
Аяҡ баҫҡан ғәзиз тупрағым.
Илем, Башҡортостан, гел йәш булып,
Көн яҡтыһы булып йәшә һин.
Даһилығың мәңгелеккә булһын,
Ябайлығың менән йәшә һин.

**3. Ильясова, Венера. Донъя ҡото - хеҙмәт : өлгөлө йорт / В. Ильясова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2004. - 19 август - Б. 3.**

Һуңғы йылдарҙа ҡалабыҙ күҙгә күренеп үҙгәрҙе: бейек, бер - береһенә оҡшамаған, үҙенә генә хас архитектура биҙәлешле, төрлө сағыу төҫтәргә буялған күп ҡатлы йорттар ҡалҡып сыҡты. Шәхси секторҙы әйтеп тораһы ла юҡ - ундағы йорттар, батша һарайҙары кеүек, һоҡландырғыс, ихаталары иһә күҙҙең яуын алырҙай. Тәбиғәттә, тирә - яҡ мөхиткә һаҡсыл ҡараш нәҡ ошонан башлана ла инде. Шундай йорттарҙың береһендә, Киров урамында, Наилә һәм Рәсүл Әйүповтар донъя көтә.

Шау сәскәгә күмелгән, еләк - емештәре өлгөргән был ихатаға күп көс һалған хужалар. Улар йорттарын 1988 йылда һалып инә. Элек ҡул - һаҙлыҡ булған был урындан



халыыҡҡа йорт һалыр өсөн участкалар бүленә. Хужалар әллә күпме ер ташып, бирелгән майҙанды күтәрә, кирбес артынан кирбес теҙеп, йорт ултырта.

Йорт һалыу кеүек эштең нескәлектәрен, бөтмәҫ - төкәнмәҫ хәстәрлек - мәшәҡәттәрен быңдай ҙур эште атҡарған кешеләр генә аңлай торғандыр. Йорттоң һәр кирбесенә күңел йылыһын һалған был матур, егәрле пар бына 34 йыл инде татыу ғүмер итә. Наилә Ғабдулла ҡыҙы 18 йыл дауамында

«Ишембайжилстрой» ҙа профсоюз комитетын етәкләй, бөгөн хаҡлы ялда. Тормош иптәше Рәсүл Ибраһим улы «Йылылыҡ селтәрҙәре» предприятиеһында эшләй. Әйүповтар ике ҡыҙына матур тәрбиә бирә, бөгөн улар үҙ тормоштары менән йәшәй, атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән, тигәндәй, үҙҙәре тырышып, йорт һалып инә, өй, ихата тулы сәскә үҫтерә. Ҡулдарынан килгәнсә ярҙам ҡулы һуҙа ата-әсә, ейән-ейәнсәрҙәрен дә тәрбиәләшә. Ғаилә усағын һаҡлаусы, уның тотҡаһы ҡатын - ҡыҙ, тигән фекерҙә хужабикә. - Әлбиттә, ир - ат - ғаилә башлығы, әммә муйын ҡайҙа, баш шунда, тигәнде онотмау зарур. Өләсәйем: «Кейәүгә сыҡтыңмы, муйын бул, Пәйғәмбәрҙәй аҡыллы бул», тиер ине. Аллаға шөкөр, тормош иптәшемдән уңдым, ул тәртипле, уңған, балаларыбыҙ алдында абруйлы. Дүрт тиҫтә йылға яҡын иңгә - иң терәшеп донъя көттөк - үкенерлек булманы.

Шәхси йортта йәшәгәндәргә эш етерлек - тауыҡ сүпләһә лә, бөтөрлөк түгел. Төп эшебеҙ - баҡса менән шөғөлләнеү. Күп итеп помидор ултыртабыҙ, яҡшы уңа - һәр төптән кәмендә 5 - 6 килограмлап уңыш алабыҙ. Ике сутый ерҙән 100 - ләп банка ҡышҡа әҙерләмә ябабыҙ, салаттар эшләйбеҙ. Бөтә аҙыҡ - түлек үҙебеҙҙеке, магазиндан кәнфит, сәй кеүек әйбер генә алабыҙ.

Гөлдәрҙе иһә күңел матурлығы, күҙ һөйөнһөн өсөн үҫтерәм. Иптәшем ерҙе ҡаҙып, түтәлдәр яһап, әҙерләп бирә, ҡалған эштәрҙе, күбеһенсә, үҙем башҡарам. Сәскәләрҙән, гөмүмән, ерҙән илһам, йәшәү дәрте алам. Донъя ҡото - хеҙмәт, тигән уйҙамын.

Иыл һайын «Сәскәләр байрамы» нда ҡатнашабыҙ - бүләк өсөн түгел, үҙебеҙҙең, тирә-яҡтағыларҙың күңеле, күҙе һөйөнһен өсөн. «Заказсы» муниципаль унитар предприятиеһына рәхмәтлебеҙ, йыл да тигәндәй ихатабыҙҙы билдәләй.

Эйе, был күркәм ихата тирә - яҡты йәйғор төҫтәренә мансый, үҙеңде ожмах баҡсаһында кеүек тояһың. Матурлыҡҡа ынтылған, уңған, тырыш Әйүповтарҙың йортонда иҫ китмәле зауыҡ булдырылған.

Ағас емеше менән, әҙәм эше менән матур, тиҙәр. Был һүҙҙәр нәҡ ошо өлгөлө йорт хужалары тураһында әйтелгән кеүек. Уларға алдағы тормоштарында ла хеҙмәттәренән илһам, йәм табып йәшәргә яҙһын.

Наилә Әйүпова гәзит уҡыусыларға «Мәләүез таңдары» әҙәби берекмәһе ағзаһы булараҡ та таныш. Бөгөн һеҙҙе уның бер нисә ижад емешен тәкдим итәбеҙ.

**Һөй һин мине**

Янып һөйәм, тиеп үҫендермә,
Һөй һин мине тып - тын, шым ғына.
Йондоҙҙарға мине тиңләмә һин,
Ер ҡыҙы мин - ябай ҡыҙ ғына.
Һөй һин мине нисек бармын шулай,
Ялан гөлдәренә тиңләмә.
Гөлдәрҙең бит ғүмере бик та ҡыҫҡа,
Мөхәббәткә юҡ ул тиң нәмә.
Наҙлы ҡараштарың менән һөй һин,
Йөрәгемде байҡап алырлыҡ,
Һөйөүҙәрең бик оҙаҡҡа булһын,
Мәңгелеккә бергә ҡалырлыҡ.

**Бәхет өсөн ни кәрәк?**

Мин бәхетле, тиеп йәшәр өсөн,
Кеше өсөн ерҙә ни кәрәк?
Кәрәк кеше булып йәшәү кәрәк,
Һөйгән кешең, һөйгән эш кәрәк.
Мин бәхетле, тиеп йәшәр өсөн,
Йорттоң йәме - балалар кәрәк.
Балаларға кәрәк әсә наҙы,
Һынау тотор аталар кәрәк.
Мин бәхетле, тиеп йәшәр өсөн
Бер туғандар кәрәк, дуҫ кәрәк.
Ярһып типкән ҡайнар йөрәк кәрәк,
Һөйөп туймаҫ тыуған ил кәрәк.

**Сыйырсыҡтар килде быйыл да**

«Тыуған яҡтарыма ҡайттым», - тиеп,
Оран һала моңло сыйырсыҡ.
Ҡанаттарын ҡағып - ҡағып һайрай
«Бик йыраҡтан ҡайттым, - тип - осоп».
Иртән һайрай, кистәрен да һайрай,
Хәбәрҙәре - һөйләп бөткөһөҙ,
Нисек аңлатайым, сыйырсығым,
Һине лә бит һағынып көттөк беҙ.
Һинең йырың менән донья йәмле,
Бәхет балҡый - ниндәй күркәмлек.
Наҙлы еле, йәмле, моңло яҙҙың
Ғүмер көҙҙәренә етерлек.

**Гөлөм ҡартайҙы**

Әллә нишләп гөлөм сәскә атмай,
Ваҡытында һыу ҙа һипһәм дә,
Әллә инде ул да көйәләнә
Йәш ғүмерҙәр бик тиҙ үткәнгә.
Киҫеп алып йәп - йәш ботаҡтарын
Һауыттарға күсереп ултырттым,
Тамыр йәйеп, сәскә атығыҙ, - тип,
Бисмилламды әйтеп йыуаттым.
Йәйелеп китеп тамыр йәйегеҙ, - тим
Сәскәләрегеҙ тиҙ һулымаһын,
Бөрөләнгән генә саҡтарында
Боҙло ямғыр, ҡырау теймәһен.
Ә ҡарт гөлөм рәхмәт әйткән төҫлө,
Башын һелкә кеүек моңайып.
«Йәш ботаҡтарыма һин ғүмер бирҙең»,
Тигән төҫлө миңә йылмайып.

**4. Ҡотлогилдина, Зөһрә. Алмағастар көҙ ҙә сәскә ата... / З. Ҡотлогилдина. - Текст : туранан - тура // Башҡортостан. - 2017. - 8 сентябрь. - Б. 3.**

Наилә менән Рәсүл Әйүповтарҙы Мәләүездә белмәгән кеше һирәктер. Биш сутыйлыҡ ҡына ерҙә үҙ өйҙәрендә йәшәп ята улар. Шуның ике сутыйы

баҡсаға бүленгән. Ошо ерҙә нимә генә үҫтермәй унған хужалар! Һәр ҡарышын ҡәҙерләп файҙаланалар. Теплица ултыртырға урын юҡ тип аптырап тормағандар, йәшелсәләрен гараж башында үҫтерәләр.

Рәсүл бөтәһен дә теүәл иҫәпләп, гараж емерелмәҫлек итеп кирбестәрен дә һалған, тупрағын да мул итеп түшәгән, һыу ҙа үткәргән. Вәт, исмаһам, ерҙен, ҡәҙерен беләләр. Ҡытайҙарың ары торһон. Ҡыяр, помидор, борос, кәбеҫтә кеүек йәшелсә генә түгел, петуния һымаҡ күп сәскәләрҙең үҫентеләре лә башта гараж башындағы теплицала үҫеп көс йыя. Шунан ғына, ер йылынғас, Наилә ханым уларҙы аҫҡа төп урындарына төшөрә.



Әйүповтарҙың йорто сәскәләргә күмелеп ултыра. Ҡапҡанан килеп инеү менән хужа яһап ҡуйған үҙенсәлекле матур һауыттарҙа ҡына гөлдәре ҡаршылай. Унан өй ишегенә яҡынлашҡанда күҙ яуын алырлыҡ ярангөлдәр сәләмләй. Ә инде гараждың да, өйҙөң дә стеналарына тултырып иҫәпһеҙ-һанһыҙ петуниялар аҫылған. Баҡсаларында сәскәләрен һанай башлағайныҡ, иҫәбенә сыға алманыҡ, 300 - ҙән ашыу булмаһа, кәм түгелдер.

Наилә әсәһе Фатима апайҙың яраткан яран гөлдәрен уның рухына күпләп үҫтерә.

- Ун биш төрө генә барҙыр, үҙемә лә бик оҡшай улар. Әсәйемде һунғы ун биш йылында ҡарап, һикһән йәшендә тәрбиәләп мәңгелеккә оҙаттыҡ, - ти хужабикә. - Ҡәйнәмдең ҡына гөлдәрен дә үҫтерәм. Улар икеһе лә ошо сәскәләр менән беҙҙең янbackslashыбыҙҙа кеүек. Гөлдәргә ҡараған һайын иҫкә төшөрөп торабыҙ. Уларҙың да рухтары ҡыуаналыр, тип уйлайбыҙ.

Ерҙәге ожмах баҡсаһы Әйүповтарҙың ихатаһы. Был сама сәскәне тәрбиәләр өсөн тырышлыҡ ҡына түгел, ә күңелең де биреп тәрбиәләү, уларҙы яратыу ҙа кәрәк. Наилә ханым сәғәт алтыла тора ла, ихатаһына сығып, гөлдере менән һөйләшә башлай.

- Хәйерле иртә, гөлкәйҙәрем! Нисек төн сыҡтығыҙ? - тип һәр береһенең хәлен белә, һыу һибә, ҡороған япраҡтарын, сәскәләрен алып ташлай, һылап-һыйпап яратып, йөрәк йылыһын өләшә.

Сәғәт унға тиклем шулар менән мәж килә. Ә иртәнге һауаның сафлығы! Ҡоштар һайрай. Кистән бимазалаған серекәйҙәр ҙә юҡ.

- Ысынлап та, ожмахта йәшәйбеҙ инде, ғүмерҙәрҙең ҡәҙерен белһәң, - ти ул.

Наилә Әйүпова күңел хистәрен шиғыр юлдарына ла һала. Бала саҡтан бөгөнгәсә йөрәгендә йөрөткән хистәр өс китап булып тупланған. «Ҡатын - ҡыҙ күңеле», «Алмағасым көҙөн сәскә атты», «Яҙҙарыма ҡош осорҙом» - тип атала улар.

- Иптәшем шул тиклем сәскә ярата. Урамда берәй пластик һауыт күреп ҡалһа, йыйып алып ҡайта, тиҙ генә сәскә ултырта һала.

Эйе, эш бит ниндәй һауытта түгел, ә нисек үҫеүендә. Тәрбиәләй белһәң, пластик һыу һауыттарында ла бына тигән итеп сәскә атып ултыралар. Унан һуң, был гөлдәр Әйүповтарҙың ихатаһын йәй генә шулай биҙәй. 300 - ләп төптө ҡышҡылыҡҡа өйгә индереү мөмкин түгел. Барыһын да кешегә тарата Наилә ханым. Бигерәк тә мәктәптәргә, китапханаларға, балалар баҡсаларына, һораған кешеләргә, күрше - күләнгә. Үҙҙәре, күп булһа, 25 - 30 - ләп төптө алып ҡалалыр. Киләһе яҙ сәскә эпопеяһы яңынан башлана.

Матурлыҡ тырышлыҡ талап итә шул. Әйүповтарҙың төрлө йәшелсә, емеш - емеште мул итеп үҫтереүҙәге кайһы бер серҙәре менән уртаҡлашыуҙарын һораныҡ.

• Картуфты сәсер алдынан орлоҡто бер биҙрә һыуҙа бер тәүлек тотоп алабыҙ. Ә һыуға ун тамсы йод, көл, марганцовка һалабыҙ. Ҡорт бөтөнләй булмай. Ике биҙрә картуфтан биш ток уңыш алабыҙ.

• Ҡыярға ҡатҡан икмәк һыныҡтарын ебеткән һыуҙы йәки бер биҙрәгә бер көрөшкә әсеткене бер тәүлек тотҡандан һуң һибәбеҙ. Был уларға табиғи ашлама була. Ун көн һайын ҡабатлап торабыҙ.

• Кәбеҫтәләргә лә ҡорт төшмәһен, күбәләктәр ашамаһын өсөн, бер биҙрә һыуға ун тамсы нашатырь спирты ҡушып һалабыҙ ҙа шуны һибәбеҙ.

• Ҡыш буйы йыйған картуф ҡабығын да әрәм итмәйбеҙ. Яҙ, ер ҡарҙан әрселгәс, Рәсүл уларҙы сейә ағасы төптәренә каҙып һала. Бына тигән ашлама була.

• Кәбеҫтәне алдан тоҙламайбыҙ. 80 - 90 башты яңы өҙөлгән килеш кенә һаҡлайбыҙ. Аҙык - түлекте төрә торған пленҡаға бер нисә ҡат итеп, һауа кермәҫлек урап ҡуябыҙ ҙа, шул килеш тора. Ҡараймай ҙа, серемәй ҙә.

• Бер ниндәй химикат ҡулланмайбыҙ. Йәшелсәләрҙең япраҡтарына ҡарап уларға нимә етмәгәнен белеп торабыҙ. Кальцийға мохтажлыҡ кисерһә, йомортҡа ҡабығын иҙеп, төнәтеп һибәбеҙ. Зеленка ла ярҙамга килә, көл дә үҙебеҙҙеке. Хужалыҡта бер нәмә лә әрәм булмай, һуған ҡабыҡтары ла үҙ файдаһын таба.

Нуриман районының Нимесләр ауылы хыҙы Наилә менән Бүздәк районынын Сабай ауылы егете Рәсүл Өфөлә танышып, Бохарала ун йыл йәшәп, ундағы һауа шарттары иптәшенә килешмәгәс, Мәләүезгә ҡайтып төпләнәләр. Инде хәҙер бергә йәшәүҙәренә ле 48 йыл. Гүзәл һәм Ирина исемле ике ҡыҙ үҫтергәндәр. Ейәндәренең туйҙарын үткәрешеп, бүлә - бүләсәрен ҡарашалар.

Киң күңелле Әйүповтарҙың ярҙамын ғәрип туғандары ла тойоп йәшәй. Наиләнең һеңлеһе Лилиә өс йәшендә һөйәк сире менән ауырый башлай. Табиптар һөйәктәре үҫмәгән был баланың ғүмерен 16 йәш менән сикләй. Ә Наилә менән Рәсүлдең хәстәрлеге аркаһында, күтәреп кенә йөрөтөүе, тәрбиәләүе һөҙөмтәһендә ул 41 йәшкәсә йәшәй.

...Ноябргә тиклем теплицаларында ике - өс тапҡыр уңыш алған Әйүповтарҙың киң күңеллелеге, егәрлелеге арҡаһында өйҙәре лә, баҡсалары ла ялт итеп тора. Унған хужалар хатта мунсаһына ла өйҙән генә инеп китә.

Былдай хужаларҙың, Наиләнең китабы исемендәге кеүек, алмағастарының көҙөн дә сәскә атыуына ғәжәпләнәһе түгел. Тәрбиә, хәстәрлек һәм һөйөү кемгә килешмәһен...

**5. Әбдрәжәпова, Зөлхизә. Көҙҙәрендә яҙҙар тыуҙырыусы /З. Әбдрәжәпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2009. - 27 ноябрь. - Б. 3.**

Акһыл болот ҡаплап алған күкте
Болондарҙа ҡолон сабышы.
Йәшендәре менән ғүмер үтә,
Йырғанактар йырып барышым.



Кеше тормошоноң йәшәйештең нигеҙе ике мөһим ҡанунға нигеҙләнгән: береһе уның йәмғиәт өсөн кәрәкле файҙалы хеҙмәт, икенсеһе - яҡты йөҙ, фәһемле һүҙ. Ғүмеренең алтын көҙөн ҡаршылағанда ла сәмләнеп йәшәү миҙгелдәрен кисереүсе гүзәл ханым Наилә Әйүпова ла ошо хәкитҡәткә инанып йәшәй.

Нуриман районы Нимесләр ауылында уҡытыусылар ғаиләһендә тәрбиәләнгән ҡыҙ кесе йәштән өлгөр, булдыҡлы булып үҫә. Алты баланы лайыҡлы тәрбиәләргә ынтылған ата - әсәһенә кәсеп итеүҙә булыша, мәшәҡәтле ауыл тормошонда бөтә эште лә яуаплы башҡара. Мәктәпте тамамлау менән теҙелешкә эшкә урынлаша. Быуындары ла ултырып етмәгән йәш ҡыҙ бер ниндәй ауыр эштән дә баш тартмай һәм тиҙ арала коллективта абруй ҡаҙана. Яуаплы һәм маҡсатҡа ынтылыусан шәхесте төҙөлөш идаралырының профсоюз ойошмаһын етәкләүҙе йөкмәтәләр. Оҙаҡ йылдар ошо өлкәлә бөтә күңелен һалып уңышлы эшләй. Йәшлегендә бөрөләнгән тәүге мөхәббәт хистәрен сайпылтмай, юғалтмай. Ғүмерлек юлдашы - хәләл

йәре Рәсүл Ибраһим улы менән бәхетле ғүмер кисерәләр. Ике ҡыҙ тәрбиәләгәндәр, юғары белем алыуға ярҙам иткәндәр, ейән - ейәнсәрҙәре тормоштарын биҙәй.

Наилә Ғабдулла ҡыҙы гүзәллеккә ғашиҡ, яратҡан шөғөлө гөлдәр үҫтереү, шиғыр яҙыу. Уның нескә күңелле тирә - йүндәге күренештәрҙе йөрәге аша үткәрә, бөтә нәмәнән йәм таба, матурларға ынтыла.

Мөхәматша Буранғолов исемендәге 1-се китапханала үткән шағирәнен. күркәм юбилейына һәм «Алмағасым көҙөн сәскә атты» тип аталған яңы китабының исем туйына арналған сарала ошо хаҡта һүҙ барҙы. Хеҙмәтенең ижад ғазабының емешен татыу кеүек шатлыҡлы һәм күркәм ғүмер байрамы менән ҡотлаусылар ғәжәйеп матур шиғри донъяға сумды, шағирәнең хистәр байлығы, һәр уҡыусының йөрәк ҡылдарын тибрәтерҙәй күңел ғәрәбәләрен оҫта шиғри шәлкемгә төҙөүе менән һоҡланды. 4-се мәктәптең татар теле уҡытыусыһы Факиһа Мөхәмәтшина йыйынтыҡ авторының һәр шиғыр юлында ҡатын-ҡыҙ бәхетен аңҡыуын, күңел зирәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Райондың татар теле уҡытыусылары берекмәһе етәксеһе Айгөл Фәйзуллина «Татар ҡыҙы» шиғыры аша Наилә Ғабдулла ҡыҙына һоҡланыуын белдерҙе. Мәктәп уҡыусылары Алина Зәйнуллина, Илдар Әбделманов, Алина Ғәббәсова, Нәфис Ҡаһарманов уҡыған юлдарҙа авторҙың тыуған еренә, ожмахтай ғәжәйеп тәбиғәтенә һөйөүе сағылды, балаларҙың туған татар телендәге телмәре кисәне айырыуса биҙәне. Районыбыҙҙа танылған ҡурайсы Сәйет Күҙәшевтың моңдары, һәүәҫкәр башҡарыусы Рауил Якиевтың гармунда һыҙҙырыуы сараны йәмләне. Кисәне әҙерләп алып барыусы Рәзилә Ҡотлогилдина юбилярға ижад ҡомарының һүнмәүен, емештәренең мул булыуын теләне. «Мәләүез таңдары» ижади берекмәһе ағзаларына был ваҡиға айырыуса ҡыуаныс килтерҙе. Ҡәләмдәштәре Наилә Ғабдулла ҡыҙына йылы хистәрен еткерҙе, моң шишмәһенең артабан да тынмай сылтырауын, ғүмер юлдарының бәхеткә генә сорналып именлектә, татлы ижад ғазабында үтеүен юраны.

**6. Әйүпова, Наилә. Халыҡ күңелен уятыусы / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2010. - 30 ноябрь. - Б. 1.**




«Көнгәк» гәзитен ҡулыма алыу менән һәр битен башынан азағына тиклем уҡып сығам. Район-ҡала йәшәйешенен, мөһим ваҡиғалары, татыу, булдыҡлы ғаиләләре тураһында мәҡәләләрҙе яратып уҡыйым. Һуңғы биттәге «Йорт усағы» рубрикаһында сыҡҡан кәңәштәргә таянып, ашһыу әҙерләйем. Шиғри шәлкемдәр уҡып рухымды байытам, ҡайһы бер авторҙарҙың тапҡыр теленә, маһирлығына һоҡланам. Уларҙы уҡығандан һуң үҙемдең дә кәләм тибрәтеү теләге тыуа, ә инде гәзит ярҙамы менән уй - хистәремде кешеләргә еткерһәм, ҡыуанысым сикһеҙ.

Һуңғы ваҡытта хәбәрселәр ҡыйыу ғына фекерҙәр яңыратты. Һәр яңылыҡты хуплап ҡаршы алам. Мәҫәлән, һуңғы айҙарҙа «яңылыҡтар» колонкаһы өҫтәлеүе уңышлы, тип табам, сөнки республикала донья күргән матбуғат баҫмаларын һәр беребеҙ алдыра алмай. «Көнгәк» аша илдә, тыуған төйәгебеҙҙә күҙәтелгән мөһим ваҡиғалар хаҡында хәбәрҙарбыҙ бөгөн.

Гәзиттең халыҡты уятыу, рухын байытыу, илгә ҡот, бәрәкәт таратыу бурысына тоғролоғо һәр һанында асыҡ сағыла, ә инде иман, ислам дине ҡанундарын аңыбыҙға һеңдерергә, күңелебеҙҙе үҫтерергә ынтылыуы һәр мосолмандың теләгенә тура килә. Бына шулай, туған татар телемдән аҙ ғына айырылған башҡортса сыҡҡан гәзит рухи һыуһынымды ҡандыра, көндәлек тормошта юлдаш һәм дуҫ хеҙмәтен үтәй.

*На татарском языке*
*Татар телендә*

**7. Галикәева, Резеда. Нурлы Наилә бит, ул! / Р. Галикәева. - Текст : турыдан - туры // Кызыл таң. - 2014. - 2 июль. - Б. 3.**

Мәләвездә аны белмәгән кеше сирәктер. Берәүләр «Ишембайжилстрой» предприятиесенең профсоюзлар лидеры булган чагыннан, икенчеләр актив җәмагать эшлеклесе, «Мәләвез таңнары» әдәби берләшмәсе әгъзасы, аченчеләр чибәр, мөлаем ханым буларак таныш аның белән.

Нуриман районының Нимесләр авылы кызы Наилә олы тормыш юлын Уфада башлаган иде. Ул трамвай йөртуче һөнәрен сайлады, Бүген бу зифа буйлы, сөйкемле ханымга карап, анын, кайчандыр «корыч ат» ны «иярләп» алуына ышануы кыен. Моның өчен хатын-кызда бераз ир - ат сыйфатлары



булу да зарур. Наилә ханымның холкы тик гүзәл затка хас булган нәфислектән генә тукылган кебек, һәм моның өчен ул тормыш юлында очраган Бүздәк районы егете Рәсүл Әюповка рәхмәтле. Нәкъ Рәсүленең мәхәббәте аны чын мәгънәсендә Хатын - кыз бөеклегенә күтәргәндер...

Әлбәттә, тормышта барысы да ал да гөл генә булмый. Яшьләр кавышкач алларына торак проблемасы килеп баса. Ул вакытларда чит җирләргә чыгып китү модада иде бит. Күп уйлап тормастан, Әюповлар да кечкенә кызларын алып, Үзбәкстан якларына юллана. Тик чит җирләрдә олтан булып үнеч ел яшәгәннән соң җае чыгу белән, өч бүлмәле фатирларын ташлап туган якларына кайтып төшә алар.

Мәләвезгә төпләнүләренең дә үз сәбәпләре бар: беренчедән, Наиләнең энесе шунда яши, янына эниләрен дә сыйдыра, икенчедән, Мәләвез

Әповларның күңеленә хуш килә. Менә дигән матур, чиста, яшел шәһәр, кешеләре күркәм, унганнар. Бүгенге көннәренә кадәр шушы жиргә гашыйк алар.

Әюповларның йортлары кунакларны әллә кайдан балкып сәламли. Ул урамда ихатасы шау чәчәккә күмелгән бердәнбер өй дисәм дә хаталанмам. Аны 1988 елда бетереп кергәннәр. Йортның эче дә нурга күмелгән. Бөтен җирдә гөлләр, чисталык хөкем сөрә. Зәвык белән урнаштырылган һәрнәрсәгә хуҗабикәнең алтын куллары орынганлыгы сизелә.

Чәчкә яраткан кешенең күңелендә начар уйлар туа алмыйдыр ул. Наилә апаның тормыш юлын да тик игелекле эшләр генә бизи. 22 ел буена «Ишембайжилстрой» төзелеш идарәсенең профсоюз оешмасы рәисе булып эшләгәндә күпме кешегә тиде икән анын, изгелеге. Ул заманда теләсә нинди проблема белән профсоюзга мөрәҗәгать итәләр иде. Кайберәүләрнең үтенечен канәгатьләндеру бөтенләй Әюпованың компетенциясенә керми, тик күз төбәп, ярдәм өмет итеп килгән кешене ничек борып чыгарасың. Хезмәткәрләрне эштән куулар, хезмәт кодексын, хәвефсезлек техникасын бозулар, тагын әллә күпме законсызлыкларга каршы көрәшә Наилә. Тыштан йомшак холыклы булып куренсә дә, үзәге корычтай нык аның.

Хаклы ялга чыкканда ул «Хезмәт ветераны» исеменә лаек була. Ул вакыттан соң инде ике ел үтеп киткән.

- Башта бик кыен булды, - дип искә ала Наилә апа.  Кеше арасында эшләп, бер мизгелдә бөтенесе дә юкка чыккач, авыр икән, үземне беркемгә кирәксез итеп тойдым.  Балалар үскән, кызларым үз тормышлары белән яши. Бу халәтне пенсиягә чыккан һәр кеше дә кичерә торгандыр. Төгәл бер ел беркайда да  чыкмый өйдә яттым...

Ә аннары Наилә апаның тормыш дәфтәренең өр - яңа бите ачыла. Алдарак әйтеп үтүемчә, бүген ул «Мәләвез таңнары» әдәби берләшмәсенең актив әгъзасы, шигырь кичәләре, лекторийлар әзерли, урындагы телевидениенең «Моңдаш» тапшыруында катнаша, үзе дә иҗат итә. Аның шигырьләре район гәзитендә еш донья күрә.

Хатын-кыз күңеле - кояш нуры
Кемгә генә чәчми җылысын,
Үзенә дә Ходай гомерләрнең
Насыйп итсен иде олысын,

дип яза ул бер шигырендә. Бу сүзләр нәкъ үзе турында әйтелгән кебек. Җылысын тирә - яктагыларга мул өләшеп яшәгән нурлы Наиләгә озын, куанычлы гомер теләп калабыз.

8. **Галикәева, Резеда. Яшьлек үткән, ә күңелдә яз... / Р. Галикәева. - Текст : турыдан - туры // Кызыл таң. - 2013. - 14 декабрь. - Б. 4.**

Мәләвез шәһәрендә яшәүче шагыйрә Наилә Әюпованын бу сузләре аның бүгенге күңел халәтенә туры килә.

Ә бит аның тормышы җиңел генә узмады. Нуриман районының Нимесләр авылында туган кыз олы тормыш юлын Уфада башлаган иде. Нәзакәтьле, нәфис туташ нигәдер трамвай йөртүче һөнәрен сайлый. Ләкин Бүздәк районы егете Рәсүл белән очрашу аның язмышын тамырыннан үзгәртә..

...Ул елларда өйләнешкәч, чит җирләргә сәфәр чыгып, яшәп кайту гадәте бар иде. Әюповлар да Үзбәкстанда үнеч ел гомер итә. Ләкин Наилә апаның шигъри юлларындагыча әйтсәк, «татлы төшемдә дә тик син идең изгеләрдән-изге син, илем!». Аерылуга чыдамый алар, туган якларына кайта.

Башкортстанда гаилә Мәләвез шәһәрендә төпләнә. Күркәм, зур йортлары барлыкка килә, ике кызлары шунда тәгәрәп үсә. Бүген инде Әюповлар дүрт оныклары уңышына сөенеп яши. Шөкер, дөньялары түгәрәк, тормышлары матур, мул, үзләре картлыкка бирешмичә бәхетле, сыйлы гомер кичерә. «Тулпарыңны читкә бәйләп куй да, килгән юлыңда йөр адашып», дип мөрәҗәгать итә Наилә апа картлыгына.

Әйе, аның әле башкарасы эшләре бихисап. Мәләвез районында үткән һәр чараның алыштыргысыз кунагы ул. «Мәләвез таңнары» әдәби берләшмәсенең актив агъзасы. Районный татар җәмгыяте оештырган чаралар да Наилә апасыз үтми. Күптән түгел Мәләвез жирендә үткән «Татар кызы - 2013» бәйгесендә жюри әгъзасы булган. Без килгән көнне район китапханәсе хезмәткәре Рәзилә Котлыгилдина аны Ана көненә багышланган матур кичәгә чакырган иде. Наилә ханым анда әниләргә багышланган шигырьләрен укыды. Районный «Ак әбиләр» клубында аңа нинди бурыч йәкләнгән дисезме? Әлбәттә, «Гүзәллек дөньясы» түгәрәген алып бару. Гүзәллекнең үзе булган Наилә ападан башка тагын кемгә йөкләтәсең бу эшне?!



Ә ул үстергән чәчәкләрнең даны хәзер Мәләвездән читкә дә таралган. Аларның нинди генә төрләре үсми монда! Чәчәкләр, өйгә сыялмыйча, тышка, анда да урын калмагач, гараж түбәсенә «менгән». Хәстәрлекле Рәсүл абый Наилә апага анда оранжерея ясап биргән.

Әйе, чәчәкләр яратыучы кеше башкача була алмый. Наилә Әюпова - бик нечкә хисле, мөлаем, ягымлы, сөйкемле, гүзәл ханым. Булмышында ниндидер серлелек тә бар - монысы чын хатын - кызга хас сыйфат. Наилә апа үзен белә - белгәннән шигырьләр яза, аның инде берничә китабы да дөнья күргән. Шигырьләренең герое - үзе кебек дөнья йөген сабыр гына тартып килүче, шул юлда бер гена табигать могҗизасын да игьтибарсыз калдырмаучы, тормышның һәр мизгеленә, яшәешенең һәр чорына сокланучы, яшьлеген сагынучы, бүгенгесенә шөкер итүче хатын - кыз.

Аның күңеленә җил-давыллы көз беркайчан да үтеп керә алмаячак. Һәрвакыт яз булачак. Яз - яшьлек, сафлык, матурлык символы. Яз ул - Наилә апаның үзе.

**Авыл исе**

Авыл исен чыгарасым килеп,
Икмәк салдым әле тагын да.
Затлы сыең читтә торып торсын,
Икмәк булса ишле табында.
Әтиләре йөгереп эштән кайта,
«Урамда, - ди, - икмәк исләре,
Икмәк исе генә уята ала
Балалыкның татлы хисләрен».
Балаларым килә аллы-артлы,
Табын ямьле, сыйлы, түгәрәк.
Күчтәнәчкә йомшак икмәк төрәм,
Җылы сүздән күңелем күбәләк,
Икмәк юлы сырлы, мәшәкатьле
Кырык катлы тирдән яралган.
Өстәлләрдә җылы икмәк булса,
Авыл исе, димәк, яңарган.

**Яшьлек үткән, ә күңелдә яз...**

Язны көтеп читтән генә
Кузәткән чагым.
Яшьлегемне сагынудан
Йөрәгемдә моң.
Үкенүләр юк күңелдә,
Яшьлек узса да.
Күңелемнең канатлары
Бераз тузса да.
Тәрәзәмне ачып куям
Җилләр искәндә.
Чиртсен әле күңелемне
Җилләр кич мәлдә.
Язлар килгән бу дөньяда
Мин дә бер кисәк.

Яшьлек үткән, күңелдә яз -
Яшәргә исәп.

**Әйтер сүзем**

Буыннардан  - буыннарга
Килгән шундый гореф - гадәт:
Хатын-кыз бар җирдә учак,
Сөю булыр кочак - кочак.
 Итәк тулы бала - чага,
Ризык булыр өстәл тулы.
Йорт эчендә ямь - нур уйнар,
Майлы-баллы булыр кулы.
Бар да булыр, сөю булса,
«Син - бергенәм» дию булса.
Учак сүнмәс - янар дөрләп,
Мәхәббәттән йорт балкыса.
Яз сулышы булыр йортта,
Тәрәз төбе булыр гөлдән.
Ай белән кояш шикелле
Ике йөрәк булса бердәм.
Гомер булыр мәртәбәле
Токым артыр үрчем - үрчем.
Канат җилпер бәхет кошы -
Эйтер сузем сезгэ шушы.

**Иске йорт**

Өй сүтәләр. Уты сүнгән йортны
Җимерәләр һич тә жәлләми.
Танып белмәсәм да йорт хуҗасын,
Күңелемә булды әллә ни...
Йортларның да гомерләре кыска,
Аларның да була яшь чагы.
Бервакыт бит шушы иске өйнең
Дөрләп янган кайнар учагы...
Кемнәр генә сыенгандыр аңа?
Кемгә биргән ул йорт җылысын?
Азык биргән, йокы, почмак биргән,

Күтеп алып олы  - кечесен.
Кем хыялы калган иске йортта?
Кем моңнары сеңгән диварга?
Йорт сүтәләр... Шуның барысына
Уйлаганнар нокта куярга.
Йорт сүтәләр. Уты сүнгән йортны
Җимерәләр һич тә жәлләми.
Туган йортны искә алып кинәт
Күңелемә булды әллә ни...

**Бар иде ул, эйе, бар иде**

Бар иде ул, эйе, бар иде
Яшь чактагы кичке уеннар,
Йолдызларга карап кара төндә
Хыялланган чаклар, ак уйлар.
Бар иде ул, эйе, бар иде
Тирә-ягым буран - кар иде,
Тик йөрәктә ямьле яз иде,
Күңелкәем тулы наз иде.
Бар иде ул, эйе, бар иде
Яшьлегемнен аяз таңнары.
Чиксез гайрәт, көчем ташкан чак,
Ак хыяллар эшкә ашкан чак.
Бар иде ул, эйе, бар иде
Жырлый  - җырлый печән чапкан чак.
Бүген утырып искә алыр чак,
Алпан - тилпән картлык килгән чак.

# Талант, заложенный Природой
# Тәбиғәттән килгән был талант...



Кем өчендер шигырь - шигырь генә,
Кем өчендер бары шөгыль генә,
минем өчен шиғырь - сердәшем,
Тормыш иптәшемнең көндәше.
Наилә Әюпова

**9. Исхакова, Назима. Лучезарно сияющее творчество Наили Аюповой / Н. Исхакова. - Текст : непосредственный // Путь Октября. - 2019. - 8 ноября. - С. 6.**

Говорят, что поэт - не политик и не историк. Он должен создавать искусство слова, он - сын гармонии. Наиля Габдулловна Аюпова вот уже более 15 лет радует мелеузовцев своим талантом, создавая полные душевной теплоты стихи.

Произведения Н. Аюповой, собранные в три сборника: «Душа женщины» (2005 г.), «Яблони, цветущие осенью» (2009 г.), «Выпускаю птиц

своих весной» (2014 г.) полюбились и в исполнении артистов эстрады Башкортостана Азамата Кильметова, Зили Усмановой, Флюры Узянбаевой, Флёры Шариповой. 23 октября Наиле Габдулловне исполнилось 70 лет. Юбилей был отмечен творческим вечером «Если в сердце зажглась звезда» в городской библиотеке - филиале им. М. Бурангулова.

Мероприятие открылось театрализованной постановкой вечерних посиделок девушек, мечтающих об учёбе в большом городе и получении нужной профессии для дальнейшей жизни. Далее ведущая вечера, библиотекарь по работе с башкирской литературой Р. Кутлугильдина, представив Наилю Габдулловну зрителям, рассказала о творчестве поэтессы, много лет радующей читателей оптимизмом и глубокой любовью к родной земле.

Вниманию зрителей были представлены книжная выставка-портрет «Лучезарно сияющее творчество» и презентация «Тропинка жизни и моя судьба».

Тёплые слова адресовали юбиляру коллеги по перу Ф. Юмагулова, Р. Аиткулов, Ф. Имангулова. От имени ветеранов труда и друзей Наилю Габдулловну поздравила 3. Бураншина. Выступления педагогов общеобразовательной школы №4 А. Файзуллиной и В. Хабировой, из школы №8 Н. Муртазиной, гимназии №1 А. Катаевой, Л. Мухаметшиной, ветеранов педагогического труда Г. Татлыбаевой, Т. Малабаевой сопровождались чтением стихотворений Наили Аюповой в исполнении учащихся школы №4 А. Шариповой, А. Рахматуллиной и Р. Хасанова из гимназии №1.

Украсили вечер песни в исполнении Р. Насырова, Г. Султангуловой, А. Байназаровой, Р. Исхаковой, Сергея и Дамиры Клименко.

**10. Кусмаева, Марьям. «Расцетала яблоня осенней порой» / М. Кусмаева. - Текст : непосредственный // Путь октября. - 2009. - 24 октября. - С. 2.**

Так называется очередной, второй, сборник стихов Наили Аюповой, появившийся на днях.

Приурочен он к юбилею этой талантливой, обаятельной женщины, ласковой, любящей матери и бабушки. Она довольно поздно взялась за перо, отработав долгие годы, в акционерном обществе «Ишимбайжилстрой» на






посту председателя крупного профсоюзного комитета, вырастив двух очаровательных дочерей вместе с супругом Расулем. То, что накапливалось в душе за долгие годы, просилось к людям, ложилось в красивые рифмованные строки. Так Наиля Габдулловна начала писать стихи. Идущие от души, они были тепло восприняты читателями газеты «Кунгак». Постепенно они накапливались, и начинающая поэтесса решила по совету коллег по перу издать сборник. Появился он в 2005 году под названием «Душа женщины». Как говорит само название, в нем отразилась бескрайняя, бездонная, любящая человечество, женская душа.

Прошло несколько лет. За это время Наиля Аюпова оттачивала мастерство на заседаниях литературного объединения, читала мастеров поэзии Башкортостана, подолгу работала над каждым стихотворением, И вот труд не пропал даром - мы держим в руках солидный сборник стихов нашей коллеги. С хорошим дизайном, богатым содержанием и актуальностью поднятых тем, он, несомненно, привлечет внимание многих. В нем

пульсирует сама жизнь - с волнениями, тревогами, раздумьями, земными радостями. На днях в библиотеке №1 состоится презентация книги, где Наиля Аюпова с удовольствием встретится с поклонниками ее поэзии. Пожелаем же ей новых творческих удач и здоровья!

**11. Кусмаева, Марьям. Эта загадочная женская душа / М. Кусмаева. - Текст : непосредственный // Путь октября. - 2006. - 27 апреля. - С. 3.**

В Мелеузовской типографии вышел первый сборник стихов Наили Аюповой, который сразу стал популярным среди любителей поэзии. В нем - изумительные россыпи щедрой, мудрой и богатой женской души. Не случайно и книга называется «Женская душа». Автор находит поэтику в обыкновенной полыни, простых деревенских улочках, увядании цветка. Вечной красотой, добротой овеяны для нее воспоминания о детстве, проведенном среди озер и лесов Нуримановского района. Увидев ее за рулем трамвая, хрупкую и нежную, народный поэт Башкортостана Мустай Карим написал стихи о девушке, оседлавшей железного коня. Около двух десятков лет Наиля Габдулловна возглавляла профком, треста «Ишимбайжилстрой», защищала интересы, тружеников. После ухода на пенсию ее неугомонная душа не находила покоя. Подняв двух детей, помогая в воспитании четырех внуков и внучек, она нашла себя в поэзии. Пришла в литературное объединение «Мелеузсвские зори», где встретила своих единомышленников, родственные души и все то, что было в сердце, легло в поэтические строки, превращаясь в стихи. Теперь их у нее много - трогательных, наполненных любовью к



родной деревне, Башкортостану, родителям, окружающим ее людям. Образы матерей, не дождавшихся мужей и сыновей с войны, погибщего на острове Даманский одноклассника Исламгали Насретдинова, простых тружеников, преодолевающих каждый день жизненные трудности, воспеты ею в книге.

На днях в библиотеке №1 прошла презентация этого сборника. Коллеги по перу, бывшие работники треста тепло поздравили Наилю Габдулловну с примечательным событием в ее жизни.

Верный спутник жизни Расуль - агай Аюпов с пониманием относится к призванию жены и всячески поддерживает. У семьи, где царит гармония, растут прекрасные цветы, благоухает сад, щедро плодоносит огород, всегда много друзей, спешащих к трудолюбивой чете, так щедро делящейся теплом своих сердец. Значит, будет общение, взаимообогащение душ и появятся новые стихи.

*На башкирском языке*
*Башҡорт телендә*

**12. Аҡбутина, Әлфиә. Бай ябайлыҡ / Ә. Аҡбутина. - Текст : туранан - тура // Йәйғор. - 2016. - 25 сентябрь. - Б. 6.**

Наилә Әйүпова - Рәжәпованың шиғырҙарын уҡығанда үҙеңде илаһи бер донъяға барып эләккәндәй тояһың. Бына ғәжәп: ул донъя иҫ киткес ҡатмарлы һәм бай, шул уҡ ваҡытта аңлайышлы һәм ябай. Был донъяла хис-тойғоларҙың тыныс тәрәнлеге, теүәл бөтөнлөгө эсир итә. Ғүмер көзөнә еткән һәр кемгә яҡын был хистәр. Ә йәшерәктәр тормоштағы һәр аҙымды үлсәберәк баҫырға кәрәклеге хаҡында уйланмай ҡалмайҙыр ошо сихри юлдарҙы уҡығанда. Ғүмер буйына йыйылған фәһем - һабаҡтарҙың шиғри фекергә төйнәлгән һығымтаһы бит был әҫәрҙәр.

Ижадсының теле лә ғәжәп бай, ләкин бөҙрәлек менән әҙәмде шаҡ ҡатырырға тырышыу юҡ ул шиғырҙарҙа. Һәр һүҙ эске донъяны, уй - фекерҙе теүәл еткереүгә хеҙмәт итә, йәғни был йәһәттән да бай ябайлыҡ хөкөм һөрә.

Наилә ханымдың бер генә шиғырын уҡып ҡарайыҡ әле.

Ир ҡабырғаһын турылап

Яһалған ҡатын - ҡыҙмын.

Ҡабырғанан булғанға ла

Иремдән уҙынмайым.

Аяҡтан яһалмағанмын -

Түбәнлек күрмәҫ өсөн.

Баш тирәһенән дә түгел -

Артыҡ үҫенмәҫ өсөн.

Ҡабырғанан яһалғанмын

Иңдәр иңдә булһа ғына,

Була йәшәргә көсөң.

Ҡултыҡ аҫтында ҡабырға -

Урыны ышаныслы.

Һынмаҫ өсөн - һығылмалы,

Осло һүҙ өсөн - осло.

Ҡабырға йөрәк янында -

Һөйөлөр, һөйөр өсөн.

Ҡартая ла белмәй үҙе,

Йәшәй юғалтмай төҫөн.

Ир ҡатыны булыу вазифаһын аңлаған зат ҡына ошо хәкикәтте беләлер. Хоҙайҙан тел асҡысы бирелгән шағирә генә ошо хәкикәтте ошондай һүҙҙәр аша еткерә алалыр.

Наилә ханымдың шиғриәте ифрат бай йөкмәтеле һәм төрлә тематикалы. Тыуған яғына - Нуриман районының гүзәллегенә, тәпәй баҫҡан, буй еткергән ауылы Нимесләрҙе һағыныуына бағышланған әҫәрҙәре айырым урын биләп тора. Оло тормош юлына баҫҡас, уға гел генә сит тарафтарҙа йәшәргә тура килә, ләкин ауылы ымһындырғыс йондоҙ кеүек ғүмер баҡый уны тартып тик тора шул. Тыуған яғының болоттарынан алып еләктәренә тиклем шығырҙарына инеп бөткән. Һәр шиғырҙан тыуған ауылының ипкене бөркөлә, тыуған еренең елдәре иҫә, тыуған тупрағының йылыһы тойола. Шиғырҙағы ҡыҙсыҡ йәп - йәш әсәһенең ҡулын етәкләй. Алыҫта ҡалған

бәхетле бала саҡтың шиғри юлдарға инеп ҡалыуы бит был. Һүҙҙәр менән сигелгән рәсемдән күңелде яҡты бер моңһоулыҡ сорнай.

Наилә Ғабдулла ҡыҙы ижады тураһында үҙе былай тип яҙа: «Һәр шиғырым - оло донья, үткәндәргә байҡау. Шиғырҙарымда - тормош гүзәллеге, теләктәрем, бала сағым хәтирәләре. Тыуған еремә, әтием-әниемә, ҡояшлы көнөмә сикһеҙ рәхмәтлемен».

Урта мәктәпте тамамлағас, Наилә Өфөгә юллана һәм трамвай йөрөтөүсе һөнәренә уҡып сыға. Ҡыҙ 9-сы маршрутта 909-сы һанлы трамвайҙы йөрөтә. Ауылда 8-се класта уҡығанда уҡ күршеләренә ҡунаҡҡа килгән Бүздәк районы егете Расүл менән танышҡан була. Баш ҡалала танышлыҡ дуҫлыҡҡа, мөхәббәткә әйләнә. Йәштәр өйләнешә, ҡыҙҙары тыуа. Бер йәшлек бала менән Үзбәкстанға Рәсүлдең туғандарына ҡунаҡҡа баралар. Өфөлә фатирһыҙ йонсоған йәш ғаилә Бохарала туғандары ныҡ итеп өгөтләүенә күнә һәм шунда тороп ҡала. Эш тә табыла, фатирлы ла булалар. Тик тыуған яҡ тарта шул, түҙгеһеҙ итеп тарта. Ун өс йылдан, 1985 йылда, Башҡортостанға әйләнеп ҡайталар. Наилә тыуған төйәгенә бик ынтылһа ла, әсәһен энеһе Мәләүезгә күсереп өлгәргәнлектән үҙҙәре лә шунда юллана. Ул сҡта КПСС Үҙәк Комитетының Генераль секретары М. С. Горбачев иғлан иткән «Торлаҡ - 2000» программаһына эләгеп, еңел генә Мәләүез ҡалаһында ер алалар һәм бер йыл эсендә үҙ ҡулдары менән йорт һалып инәләр. Бик унған, эшлекле Рәсүлдең оҫта ҡулдары менән йәшәр өсөн бик уңайлы йорт - ихата хасил була, егәрле, зауыҡлы Наилә уны гөл - сәскәгә күмә.

Эйүповтарҙың донъяһын бигерәк тә яран гөлө биҙәй. Әсәһенең яратҡан гөлөн хужабикә өй эсендә лә күп итеп үҫтерә, яҙҙан көҙгә тиклем ихатаһы ла уңыш аллы-гөллө сәскәләренә күмелә. Был гөлдәр уның шиғырҙарында ла балҡый:

Ал сәскәм яран гөлө
Әсәйемдән ҡалған ҙур бүләк.
Яҙҙар һайын сәскә ата гөрләп,
Әсәй ултырғандай һүҙ һөйләп.

Һағынғанда, балам, ҡарарһың тип,

Биргән ине иҫән сағында.

Әсәйемдең наҙлы күҙ ҡарашы

Яран гөлдәрендә сағыла, - тип яҙа ул бер шиғырында.

Наилә ханым ғүмер буйы шиғыр ярата, уҡытыусы атаһы Ғабдулла Ғәли улы Рәжәповтың көслө йоғонтоһо аҫтында тәрбиәләнә. Атаһы уға бөйөк әҙиптәр Ғабдулла Туҡай, Һаҙый Таҡташ, Мәжит Ғафури донъяһын аса. Шунлыҡтан, урыҫ мәктәбендә уҡыһа ла, туған татар телен белеп үҫә. Ҡыҙыҡай бәрәнге утағанда ла, Һыуға барғанда ла шиғыр ятлап йөрөр була, үҙе лә дүрт юллыҡтар сығара башлай. Байтаҡ йылдар дауамында ул үҙенең ижадсы булыуына әһәмиәт биреп еткермәй. Донъя мәшәҡәттәре, яуаплы эш тә ваҡыт ҡалдырмағандыр инде. Наилә ханым Мәләүездә егерме йыллап ҙур төҙөлөш идаралығында профсоюз ойошмаһы рәйесе була. Мең ярымлап кеше эшләгән предприятиела профком райесе булыу ир - ат башҡара торған вазифа иҫәпләнһә лә, Наилә Ғабдулла ҡыҙы һынатмай, ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итә белеүе, төплө аҡылы, хәстәрлелеге менән абруй яулай.

Хәҙер инде хаҡлы ялдағы Наилә Әйүпова - Рәжәпова баш-көллө ижадҡа сумған. Өс китабы донья күргән: «Ҡатын - ҡыҙ күңеле» (2005 йыл), «Алмағасым көҙөн сәскә атты» (2009 йыл), «Яҙҙарыма ҡоштар осорам» (2015 йыл). Шиғырҙары республика матбуғатында баҫылып тора. «Одноклассники» сайтында «Изге мираҫ» тигән төркөм асҡан, ижадын һөйөүселәр менән аралашып, уларға шиғырҙарын уҡытып бара. «200 – 300 - әр лайк - ҡуйылғандары бар, халыҡ шиғыр ярата», - ти автор. Рух һәм әхләк тотҡаһы булған дин юлынан ихлас бара ул. «Аллаһ һаҡлаһын» тигән төркөмдә ошо юлда ижад ителгән шиғырҙары күп.

Авторҙы халыҡ менән йәнле осрашыуҙарға бик йыш саҡыралар. Композиторҙар (Муса Смаҡов, Флүрә Үҙәнбаева, Нәзирә Ишҡолова, Флүрә Шәрипова) уның шиғырҙарына йырҙар яҙа.

Тыуган яғы Нуриманға ла ара - тирә юлы төшөп тора. Тик барыбер танһығы ҡанмай, һағыныуҙары яңынан - яңы шиғыр юлдары булып аҡ ҡағыҙға һибелә.

Яҡташыбыҙҙың шиғырҙар шәлкемен һеҙгә тәҡдим итәбеҙ, хөрмәтле дуҫтар.

**Тыуған ерҙең ғәзиз балаһымын**

Атай нигеҙендә кемдер йәшәй,
Кемдәр унда донъя ҡорғандар?
Баҡсалағы үҫкән сирендәр ҙә
Күптән инде һулып ҡороғандар.
Йән йылыһын атай, әсәйемдең
Ҡалмағанмы, тиеп, нигеҙҙә?
Тыуған йорттоң ал ҡапҡаһын асам,
Ауылыма ҡайтып һәр көҙҙә.
Тыҡрыҡтан төшәм күл буйына-
Күл буйҙары йәшел ирәмлек,
Көйәнтәһен аҫып иңбашына
Арттан ҡалмай йөрөй шуҡ йәшлек.
Ҡулдарына оҙон сыбыҡ тотоп
Ҡаҙҙар ҡыуып килә баласаҡ.
Ялан тәпәй йөрөгән туҙан юл да
Йөрәк түрҙәрендә ҡаласаҡ.
Күл буйында үҫкән кәкре талдар
Сәләм бирә, эйеп баштарын,
Киҫәтеүле әсәй ҡарай төҫлө
Бер аҙ ғына йыйырып ҡаштарын...
Күпме генә ситтә йәшәһәм дә,
Булһа ла юлдарым бормалы,
Тыуған ерҙең ғәзиз балаһымын,
Данлап йырлайым ялан, ҡырҙарың,
Данлап йырлайым мүк еләге үҫкән
Ауыл осондағы һаҙҙарын,
Тыуған яҡтың иҫкән елдәрендә
Тоям әсәй ҡулы наҙҙарын.

**Үҙ өлөшөң менән өлөшлән!**

Япҡыс итәгендә күстәнәсе,
Әсәй керҙе тағы төшөмә -
«Донъяң етеш, балам, йөгөңдө тарт
Етерлеген генә көсөңә».

Иейестә тәгәрләгәнбәрәнгеһе,
Ҡара икмәк телем ҡулында.
«Ерҙә йәшәүеңдең ҡәҙере лә
Кешелекле, балам, булыуҙа».

Күкрәгенә терәп икмәк телде –
«Үҙ өлөшөң менән өлөшләп...
Ерҙән тыуып, ергә һеңәбеҙ, - ти,-
Булһа ла өлөшөң көмөштән».

Япҡыс итәгендә күстәнәсе,
Ҡара икмәк төргән ҡәҙерләп.
Йәне кереп сыҡҡан һымаҡ миңә,
Йөрөйөм йүгереп, табын әҙерләп.

**Әйтеп барма**
*(Ҡәйнә ҡәңәштәре)*

Әсәйеңдең кәңәштәрен
Әйтеп барма ireңә.
Ireң низәр әйткәнен дә
Түҙ, әйтмә әсәйеңә.
Йортоңда булған хәлдәрҙе
Һөйләп барма яттарға,
Ғаиләң усағы һүнмәһен-
Тырыш елдән һаҡларға.
Ireңде яратаһыңмы?
Ярат туғандарын да!
Яҡындағыларын ярат,
Ярат йыраҡтарын да.
Яратҡың килмәйҙер, беләм.
Хөрмәт итеүең кәрәк!
Ир туғандарын хөрмәтләү-
Ғаиләңә - ул ҙур терәк!

Ике яҡты тигеҙ күрһәң,
Ирең дә һине һөйөр,
Күршеләрең һиңә ҡарап
Аҡыллы ҡатын тиер.

**13. Күсмәева, Мәрйәм. Ҡатын - ҡыҙҙың сихри донъяһы : Яңы китап сыҡты / М. Күсмәева, «Мәләүез таңдары» әҙәби берекмәһе етәксеһе. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2005. - 13 октябрь. - Б. 4.**

Әбейҙәр сыуағы кеүек ҡояшлы ла, көҙҙөң һуңғы көндәре кеүек моңһоу ҙа, төпһөҙ диңгеҙҙәй тәрән, серле лә ҡатын - ҡыҙ донъяһы. Бигерәк тә ул ҡатын-ҡыҙ шағирә булһа.




Күпте күргән, күпте кисергән, тормош һынауҙарын сабыр үткәргән Наилә Ғабдулла ҡыҙы Әйүпова озак йылдар «Ишембайжилстрой» ҙың Мәләүез идаралығында профсоюз ойошмаһын етәклэй хеҙмәт кешеләрен яҡлауға ҙур көс һала. Хаҡлы ялға сыҡкас, ижад итергә мөмкинлек тыуа һәм ул ең һыҙғанып шиғырҙар яҙа башлай. «Көнгәк» те уҡыусылар Наилә Әйүпованың күңел ынйыларын яратып ҡабул итте. Хәҙер бына бер нисә йыл ул «Мәләүез таңдары» ның әүҙем ағзаһы. Беҙ үткәргән кисәләрҙә даими ҡатнаша.

Ошо көндәрҙә ҡәләмдәшебеҙ ҡулына тәүге йыйынтығын алды. Мәләүез типографияһында үҙ иҫәбенә баҫтырған йыйынтыҡ «Ҡатын - ҡыҙ күңеле» тип атала. Алты тиҫтәнән артыҡ шиғыр һәм яҡташы, һабаҡташы, Даманск утрауында алыштa һәләк булған яугир Исламғәли Насретдиновҡа арналған «Амур буйҙарынан килгән ауаз» поэмаһы ингән был китапҡа. Ихлас хистәргә, фекер тәрәнлегенә, төрлө темалы бай шиғырҙар күптәр күңелендә

урын табыр, моғайын. Улар еңел уҡыла, тормошсан һәм аңлайышлы. Был шиғырҙар - серле ҡатын-ҡыҙ донъяһының көҙгөһө.

**14. Сибәғәтуллина, Рәфилә. Һеҙ әле лә бергә, һеҙ әле лә матур... / Р. Сибәғәтуллина. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2016. - 28 май. - Б. 3.**

М. Буранғолов исемендәге китапханала «Ғаилә - бәхет бишеге» тип аталған сара үтте. Байрамға тормош һуҡмағынан ауырлыҡтарға бирешмәй бергә атлаған, мөхәббәт алиһәһенә тоғро парлар ҡатнашты.



Рәйхана һәм Миннулла Хафизов, Гүзәл һәм Азат Рәхмәтуллин, Наилә һәм Рәсүл Әйүповтар ғаилә ҡиммәтәре, татыу йәшәү серҙәре менән уртаҡлашты. Гөлнара һәм Марат Игбаевтар, Фәнүзә һәм Әҙһәм Шәһәровтар, Гөлмизан һәм Миҙхәт Таштимеровтар, Фәлхиә һәм Ревал Хайсаровтарҙың өлгөлө - ғаиләһен йәштәргә үрнәк итеп күрһәтеү кәрәтер. Китапхана белгесе Рәзилә Ҡотлогилдина йыйылыусыларҙы тантананың маҡсаты менән таныштырып, бер-береһен ярты һүҙҙән аңлаған быңдай парҙарҙың бәрәкәтле Мәләүез ерендә күп икәнлеген әйтеп үтте.

Ҡатнашыусы парҙар ғаилә сере менән уртаҡлашты, һөйөү, тоғролоҡ һәм бәхеттән үрелгән ғүмер күперенә илткән һуҡмаҡта түҙемлек, сабырлыҡ, аҡыллыҡ йүнәлеш биреүсе маяҡ икәнлеге тураһында һөйләне. Хужабикәләр аш - һыу, ҡул эштәре, гөл - сәскә үҫтереүҙә оҫталығын күрһәтте, тәжрибә уртаҡлашты. Ир - егеттәр аҙ һүҙлелек күрһәтһә лә, «бер һүҙ етә бөрөләнеп,

сәскә атып китергә» тигәндәй, һөйгәндәренә йылы һүҙен, маҡтауын, һоҡланыуын еткерҙе. «Ғаилә һандығында нимә бар?» конкурсы хәтер ҡылдарына ҡағылырға, унда һаҡланған хәтерҙә ҡалырҙай мәлдәрҙе янынан иҫкә төшөрөргә мәжбүр итте. Шулай уҡ «Кәләшемдең йәш сағы» һүрәт конкурсы уҙғарылды. Сара һөйөү, ғаилә, мөхәббәт темаһына арналған шиғыр, йыр менән дауам итте.

*На татарском языке*
*Татар телендә*

**15. Әюпова - Рәжәпова, Наилә. Күңел ача яшьлек яланына : шигыр / Н. Әюпова - Рәжәпова. - Текст : турыдан-туры // Кызыл таң. - 2015. - 2 июль. - Б. 4.**

**Сафлыктан корылган**
Наз эчендә юкә,
Төнен чәчәк аткан,
Бал исенә чумган
Бүген яңа ал таң.
Текә ярда томан,
Йөзә ак болытлар,
Шундый да сихрилек
Әйтче, кайда сон, бар?
Чәчәкләр бит юа -
Чык сулары шифа,
Чәч толымын сузган
Ак каеннар зифа.
Басуда арышлар
Башаклары тулы,
Зәңгәр күк болытсыз,
Күктә аккош юлы.
Көнбагыш чәчәкте
Кояшка борылган,
Нинди гүзәл дөнья
Сафлыктан корылган.
Каен җиләкләрен өздем...
Каен минлекләрен өздем,
Өзмәдем яшеллерен,

Сизми калганмын,
югалттым,
Гомеремнең яшел мәлен.
Яшьлек тугае гел генә,
Күбәләкләр төрледән,
Күңелемә нигә якын
Бәбкә чирәме - үлән?
Яшел тугай, кызыл җиләк-
Хәтердә балачагым,
Күбәләктәй очып йөри
Күз дә күрә алмас чагыл.
Җәй яме кергән күңелгә,
Кәккүкләр гомер юрый,
Җәйләр иштсе әрсез күңел
Яшьлек яланын урый.

**Ямгырдан соң**
Өметле дә,
Җылы яңгыр яуды,
Җир тын алды, китте күпереп,
Коры, эссе искән коньяк җиле
Бара иде җирне киптереп.
Җир сулады тирән сулыш алып,
Кипкән үлән китте яшәреп,
Гәүдәләрен турайтты агачлар,
Яфраклары тора яшьләнеп.
Үлән арасыннан баш калкытып
Җиләк чәчәкләре карады,
Кылганнарның ефәк толымнарын
Җәйнең йомшак ишле шарады.
Бар тере җан килде хәрәкәткә
Яңгыр тамчылары җан өрде,
Урман чишмәсенең сихри моңы
Тирә якны җир-моңга күмде.
Таңнар моң әчендә
Агачларга бәллү элеп,
Кошлар бала чыгара,
Җәйге таңнар моң эчендә
Тылсымына чыда ла!

Кыя таулар арасыннан
Иртәнге кояш туа,
Тапсыз, тамгасыз яңа көн
Төннең карасын куа.
Көн туа, яңа көн туа,
Яңа көндә зур өмөт,
Ялан, кырда җиләк исе,
Гөл, чәчкә киткән күмеп.
Үрмәкүчләр челтәр үргән,
Иртәнге чык ялтырый,
Бал кортлары, арып-талып,
Ал гелләрдән ял сорый.
Күбәләкләр хәбәр сөйли
Чәчәкләр керфегенә,
Күк тә ачкан зәңгәр күзен,
Хайран дөнья серенә.

**Болыт**

Чыбылдыгын төреп томан
Сукмак салды болытка,
Җиргә төшкән чагы юк шул,
Болыт чаклы булып та.
Ары чапты, бире чапты
Җирде әйләнде болыт,
Бакча гөлен иркәләде,
Күбәләк булып куныл.
Түк башаклар битен сыйпап,
Әйләнде киң кырларны,
Күктә яшәп ник белмәгән,
Җирдә мөгҗиза барны?
Ялан гөлләре керфеген
Дымлатып сыйпап үтте,
Күксел карашын күтәреп,
Юкә чәчкәсен үпте.
Сарылды тал куагына,
Үрелде миләшләргә,
Күл өстен йөреп әйләнде,
Бүленде өлөшләргә.
Моңсу дуамаллык белән

Уралды җирдә болыт,
Хискә тулып күккә очты,
Җир бизәгенә тулып.
Җылы нурларын таратып,
Кояш ачты күзләрен.
Күзәтә болыт офыктан
Сихри жир бизәкләре.

**Матбуғатта баҫылған шиғырҙар, хикәйәләр - стихи, рассказы напечатанные в периодической печати**

**16.** Әйүпова, Наилә. Атайыма әйтер һүҙем бар; Кәртә; Бисмиллалы икмәк; Әрем; Ғүмер көҙҙәренә инеп барам : шиғырҙар / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2004. - 19 октябрь. - Б. 3.

**17.** Әйүпова, Наилә. Ҡатын - ҡыҙ күңеле; Ай һәм әсә; Шөкөр итәм; Алмағасым; Әсәйемдең яран гөлдәре; Умырзая; Ҡайттым әле тыуған ауылыма; Ҡайҙа тәгәрәйһең һин, бәндә? : шиғри тулҡындарҙа / Н. Әйүпова . - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2004. - 3 март. - Б. 3.

**18.** Әйүпова, Наилә. Атайым мираҫы : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2006. - 25 июль. - Б. 4.

**19.** Әйүпова, Наилә. Кисер, ерем : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2006. - 4 май. - Б. 4.

**20.** Әйүпова, Наилә. Әйтерһең дә, яҡтан яралған : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2006. - 26 январь. - Б. 3.

**21.** Әйүпова, Наилә. Эй ғүмерҙәр : шиғриәт минуттары / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2006. - 20 июнь. - Б. 3.

**22.** Әйүпова, Наилә. Ямғыр яуа : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2006. - 10 август. - Б. 4.

**23.** Әйүпова, Наилә. Аҡ ҡар яуған ерҙә өмөт бар : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2007. - 25 декабрь. - Б. 4.

**24.** Әйүпова, Наилә. Миҙгелдәр : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2007. - 20 сентябрь. - Б. 4.

**25.** Әйүпова, Наилә. Шиғри тулҡындарҙа : Һәр кешенең була үҙ йыры; Һөйлә әле серҙәреңде / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2007. - 11сентябрь. - Б. 4.

**26.** Әйүпова, Наилә. Күңел йылыһы : аҡыллыға ишара / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2008. - 13 ноябрь. - Б. 2.

**27.** Әйүпова, Наилә. Яңы йыл килә : шиғри тулҡындарҙа / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2008. - 17 январь. - Б. 4.

**28.** Әйүпова, Наилә. Әйтер һүҙем : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан – тура // Көнгәк. - 2009. - 29 январь. - Б. 4.

**29.** Әйүпова, Наилә. Орлоҡ сәсеп : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан – тура //Көнгәк. - 2009. - 14 апрель. - Б. 4.

**30.** Әйүпова, Наилә. Йылы икмәк : шиғри тулҡындарҙа / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2009. - 20 январь. - Б. 4.

**31.** Әйүпова, Наилә. Ғүмер ағыштарым ҡораманан : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2011. - 3 ноябрь. - Б. 4.

**32.** Әйүпова, Наилә. Ғүмер ағыштарым ҡораман : шиғри тулҡындарҙа / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 20011. - 3 ноябрь. - Б. 4.

**33.** Әйүпова, Наилә. Йәшәң сере; Өмөт менән һөйләшеү : шиғырҙар / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2011. - 19 май. - Б. 4.

**34.** Әйүпова, Наилә. Бәхет өсөн ни кәрәк?; Кәртә; Шундай ҙа саҡтар була : шиғырҙар / Н. Әйүпова / тат. теле. - Текст : туранан - тура // Ағиҙел. - 2011. - № 4. - Б. 97- 98.

**35.** Әйүпова, Наилә. Һалҡын бабай; Нимә ул бәхет : шиғырҙар / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2011. - 27 январь. - Б. 4.

**36.** Әйүпова, Наилә. Кеше рәнйеше алма : аҡыллыға ишара / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2012. - 11 ноябрь. - Б. 2.

**37.** Әйүпова, Наилә. Йән әрнеүен күтәрә алманы : күңел ауазы / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2013. - 12 февраль. - Б. 2.

**38.** Әйүпова, Наилә. Һин изгелек менән ат; Сәләмәт бул, әсә, Тау шишмәһе; Донъяла бар яҡшы кешеләр : шиғри тулҡындарҙа / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2013. - 14 январь. - Б. 3.

39. Әйүпова, Наилә. Алмағас һәм малай : хикәйәт / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2013. - 3 апрель. - Б. 2.

40. Әйүпова, Наилә. Әгәр сөю булса...: шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Өмөт. - 2013. - 9 март. - Б. 4.

41. Әйүпова, Наилә. Әсә күңеле бала һағында : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2013. - 21март. - Б. 4.

42. Әйүпова, Наилә. Хәтеремдәсең, әткәй...: иҫтәлек / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Өмөт. - 2013. - 31 август. - Б. 12.

43. Әйүпова, Наилә. Һөйләмдәргә була теҙергә; Ер йәме; Сихри төндә...: шиғри тулҡындарҙа / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2013. - 27 март. - Б. 3.

44. Әйүпова, Наилә. Икмәк тәме; Бисмиллалы икмәк; Һәр туған көн - яшәү бәйрәме; Донъя шундый : шиғырҙар / Н. Әйүпова. - Текст : туранан – тура // Өмөт. - 2013. - № 54. - Б. 2.

45. Әйүпова, Наилә. Бәндә; Моңло йырҙар изге доға кеүек; Бер үк уяу булһын кешелек; Төнөм үтте; Турғай һайрағанда; Йөрәкте алып киттең; Яҡты сырай; Йөрәк : шиғри тулҡындарҙа: / Н. Әйүпова - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2014. - 13 декабрь. - Б. 4.

46. Әйүпова, Наилә. Әсә нағыштары : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2014. - 15 март. - Б. 4.

47. Әйүпова, Наилә. Ҡалам, дуҫтар; Бик ҙур теләктә; Яҙылығыҙ әле «Көнгәк» кә! : шиғырҙар / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2014. - 15 март. - Б. 4.

48. Әйүпова, Наилә. Хәйерле көн теләйем тыуған илгә; Иҫке альбом; Йәшлегемә ҡош осорам : шиғри тулҡындарҙа / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2014. - 8 ноябрь. - Б. 4.

49. Әйүпова, Наилә. Күңел оса йәшлек яланына; Сафлыҡтан ҡорылған; Ҡайын еләкләрен өҙҙөм...; Ямғырҙан һуң; Таңдар моң эсендә; Болот : шиғырҙар / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Ҡыҙыл таң. - 2015. - 2 июль. - Б. 4.

50. Әйүпова, Наилә. Нәфисә : хикәйә / Н. Әйүпова / тат. теле //Диләфрүз. – 2015. - № 1 (51). - январь. - Б. 9 - 10.

**51.** Әйүпова, Наилә. Яңа йыл белән : шиғыр / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Манзара. - 2015. - № 1. – Б. 1.

**52.** Әйүпова, Наилә. Өмөт алдан йөрөй : хикәйә / Н. Әйүпова / на тат . яз. - Текст : туранан - тура // Диләфрүз. - 2017. - № 4 (77). - март. - Б. 10 - 11.

**53.** Әйүпова, Наилә. Яуған ҡарҙа өмөт бар : шиғырҙар / Н. Әйүпова / на тат . яз. . - Текст : туранан - тура // Диләфрүз. - 2018. - № 1 (87). - январь. - Б. 18 -19.

**54.** Әйүпова, Наилә. Йәшәү сере : шиғыр / Н. Әйүпова / тат. теле. - Текст : туранан - тура // Диләфрүз. - 2018. - № 6 (92). - июнь. - Б. 22.

**55.** Әйүпова, Наилә. Ҡарт хәрбиләр илай : шиғыр / Н. Әйүпова / тат. теле. - Текст : туранан - тура // Диләфрүз. - 2018. - 19 май. - Б. 17.

**56.** Әйүпова, Наилә. Йортыбыҙ фәрештәһе : хикәйә / Н. Әйүпова / на тат. яз. - Текст : туранан – тура // Диләфрүз. - 2019. - № 11 (109). - ноябрь. - Б. 23- 25.

**57.** Арыҫланова, Лилиә. Күңел донъяһы бай уның : шиғырҙар / Л. Арыҫланова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2019. - 18 октябрь. - Б. 3.

**58.** Әйүпова, Наилә. Күңел дәфтәре; Көҙләрҙә бар алма тәмдәре : шиғырҙар / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура, на тат. яз. // Диләфрүз. - 2019. - № 10. - Б. 18.

**59.** Әйүпова, Наилә. Яңылышмағыҙ, көҙгөләрем; Сибәр хатын : шиғри тулҡындарҙа / Н. Әйүпова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2019. - 1 ноябрь. - Б. 7.

# Навсегда осталась в наших сердцах
# Күңелдәрҙә калды үрелеп



**60. «Көнгәк» гәзите редакцияһы. Хәтер. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2020. - 27 март. - Б. 7.**

Гөл - сәскәгә, матурлыҡҡа, йәмле яҙҙарға ғашик Наилә Ғабдулхаҡ ҡыҙы үҙе лә иҫ киткес сағыу, нурлы, ҡабатланмаҫ сәскәгә тиң ине. Ул - тирә - яҡҡа йылыһын, наҙын, һөйөүен бөркҡән илаһи зат, һоҡланыу, ғорурланыу тыуҙырған ысын ҡатын - ҡыҙ булып хәтерҙә уйылып ҡалды. Уның шиғырҙары аша асылын, күңеленең ни тиклем бай икәнен белергә мөмкин. Ә күпме яҙылмаған әҫәрҙәре, беҙҙең менән уртаҡлашмаған серҙәре, аҡыллы фекерҙәре, алтын һүҙҙәре үҙе менән мәңгелеккә китте. Бәхетле ине Наилә дуҫыбыҙ... Сағыу бер йондоҙ булып, фәҡәт ошо фиғелдә, шул тәбиғи һәләттәр менән Ер йөҙөнә килеүе - бәхет. Балҡыны ла, һүнде тип әйтергә тел әйләнмәй. Юҡ! Һүнмәне ул! Үлемһеҙ әҫәрҙәрендә күңел йылыһы, кешелеккә, тотош тормошҡа һөйөүе, сикһеҙ мөхәббәте урғыла.

Беҙҙең хәтерҙә һин мәңгелеккә уйылып ҡалдың...

Гәзит уҡыусыларына Наилә Әйүпованың һуңғы көндәрендә яҙылған хушлашыу хаты менән бүлешәбеҙ. Һәр һүҙе йөрәкте өтә, әрнетә, тетрәндерә. Аңлы рәүештә тормош менән бәхилләшеп, ҡулына аҙаҡҡы тапҡыр ҡәләм алыуы оло батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, иҫ киткес рух ныҡлығы.

Әүҙем гәзит уҡыусыбыҙҙың, ҡәләмдәшебеҙҙең ҡапыл арабыҙҙан китеүе беҙҙең өсөн оло юғалтыу. Йәнең йәннәттә булһын, Наилә дуҫыбыҙ!

**Һуңғы хат**

Ҡаралы аҡ бөгөн минең күгем,
Ҡояшы юҡ, күкһел болоттар,
Йондоҙомдо эҙләйем күккә ҡарап,
Күренмәйҙәр... Юҡ инде, юҡтар.
Һаубуллашыу көнө етеп бара,
Һөйләп ҡалайым тимен һүҙемде.
Күкһел күктәй томан ҡаплай һымаҡ,
Күҙ йәштәре ҡаплай күҙемде.
Аллаһ эмеренән уҙып булмай,
Маңлайға яҙылған тыуғас та.
Кемдәр ҡалған, йәшәйһе килә тип,
Һуңғы минуттары һуҡҡас та?
Ә шулай ҙа мин бик бәхетлемен,
Шиғырҙарым булды янымда.
Дуҫтарымдың йән йылытҡыс һүҙе
Йылы биреп торҙо йәнемә.
Һуңғы хатым һеҙгә, йән дуҫтарым,
Туғандарым, һеҙгә сәләмем!
Әгәр һеҙгә башҡа яҙа (а)лмаһам,
Иҫтәлеккә булһын ҡәләмем.

(Наилә Әйүпова)

**61. Шәйәхмәтова, Хәлиҙә. Һөйөү менән һуғарылған ижад / Х. Шәйәхмәтова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2020. - 27 март. - Б. 7.**

Мөхәббәтле, йырлы - моңло ғаиләлә тыуып үҫкән апайыбыҙ үҙе лә ғүмере буйы ата - әсәһе шикелле йәшәргә тырышты. Йәшлегендә тормош иптәше Рәсүл ағайҙы осратыуы менән сикһеҙ бәхетле ине. Шуға ла бер шиғырында:

Рәхмәтем ҙур һиңә, йыраҡ йәшлек,
Һөйөҙәрҙең бирҙең татлыһын,
Ғүмерҙәрҙең бирҙең иң нурлыһын,
Тормошомдоң бирҙең йырлыһын, - тип яҙғайны ул.

Һәр саҡ шатлыҡ, бәхеттән генә ғибәрәт түгел шул тормош. Һөйөклө ҡыҙы сирләп киткәс, бала ҡайғылары баҫҡанда, Хоҙайҙан ғәзизенә ғүмер теләп, ауыр кисерештәрен дә шиғри юлдарҙа сағылдыра Наилә апай.

Мин ризамын һинән, яҙмыш,
Өй иңемә барыһын да.
Ялбарып һорайым һинән,
Тик балама ҡағылма?!

Тормошон биҙәп ул тәҙрә төптәрендә, баҡсаһында гөл-сәскәләр үҫтерергә яратты. Йәшәйешен, бар булмышын, үҙен уратҡан мөхитте сихри донъяға әүрелдергеһе килде:

Йүгереп кенә үтер дала түгел,
Юлдарымда эшем етерлек.
Хәлем етһә икән, шул даланы
Шау сәскәле ожмах итерлек.

Наилә Ғабдулла ҡыҙы яратҡан кешеһе Рәсүл ағай менән татыу йәшәне. Һуңғы минутына тиклем янында ышанысы, таянысы, ысын мөхәббәте булды. Һөйөклө кешеһенә арналған һәр бер шиғыры саф мөхәббәт, юғары хистәр менән һуғарылған.

Һайланманым йәшлек яҙҙарымда,

Өлөшөмә төшкән көмөшөм.

Ғүмер көҙҙәрендә йән йылыта

Йәшләй һөйгән, ятраҡан кешем.

Йыш ҡына шиғырҙарында, тормоштоң тиҙ үтеүен аңлап, йәшәйештең ҡәҙерен белеп, был донъяла ысын кеше булып йәшәргә саҡырып, үтенә ине:

Наҡыс ҡына булған был донъяла,

Һәр миҙгелдең белеп ҡәҙерен,

Ник тормошто биҙәп йәшәмәҫкә

Ихтирамлап, һөйөп бер - берең?!

Наилә апай бөтә кешенең дә татыу, берҙәм булыуын теләне, шиғырҙары ла эскерһеҙ, яҡты ине. Беҙ уны бер ваҡытта ла онотмабыҙ, уның яҙғандары күңелебеҙҙә тормошҡа һөйөү булып яңғырар.

**62. Ҡотлогилдина, Рәзилә. Йәнең Йәннәттә, урының ожмахта булһын / Р. Ҡотлогилдина. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2020. - 27 март. - Б. 7.**

«Эштәрем күп әле, яҙҙарымда», - тип яҙғайның да бит Наилә апай...

Баҡыйлыҡҡа ҡапыл ғына күскән яҡын кешебеҙҙең арабыҙҙа юҡлығына һис кенә лә күңел ышанмай... Яҡты йөҙө, ихласлығы менән рухиәт донъяһын нурлап йәшәгәнен тоя, ярата, уға ҡарап һоҡлана инек. Тормош булғас төрлө хәлдәр була, эш буйынса сабырһыҙланып, кемгәлер ҡәнәғәтһеҙлек белдереүҙе ишеткәндә лә итәғәтле генә үҙ фекерен әйтер. Күңелендәге хис - тойғоһон сәсеп йөрөмәне, һәр ваҡытта ғорур ҡала белде.

Хоҙайҙың уны беҙҙән айырыуы ла бушҡа түгелдер: тормошто яратырға өйрәтер, кешеләрҙе һаҡлар өсөн яралтҡандыр, күңел донъяһы илсеһе, матурлыҡ тыуҙырыусы фәрештә итеп ебәргәндер ҙә, әрһеҙләп ҡуймағыҙ тигәндәй, нәҙәкәтле, һөйкөмлө сағында кире алғандыр.

Наилә Ғабдулла ҡыҙының тыуған яғы - Нуриман. Бала саҡтан тырыш, маҡсатлы, тәрбиәле, инсафлы булыуы уҡытыусы ғаиләһендә тыуып үҫеүенә

бәйлелер. Тормош ҡарабында оло дингеҙгә сыҡҡан бәләкәй, әммә ҡыйыу, оло йөрәкле капитан шикелле, Өфөгә килеп «тимерат» ты йүгәнләй ул.

Ҙур ағымға ҡаршы йөҙгән, үрҙәргә үрләгәндәр араһында, һис шикһеҙ, беҙҙең Наилә апай.

Тормош иптәше Рәсүл Әйүповты осратып, бер-береһен бәхетле итеүҙәре, хәләлен бер ваҡытта ла иғтибарһыҙ ҡалдырмауы, туғандарына ихласлығы, татыу йәшәү нигеҙе берҙәмлек икәнлеген иҫбатлаған аҡыллы ҡатын да ул. Ошо һөйөүҙе, күңел йылыһын ҡыҙҙары Гүзәл һәм Иринаға, ейән - ейәнсәренә лә бүлә алған.

Наилә Ғабдулла ҡыҙы ижадҡа һуңлап килһә лә, ғөрөф - ғәҙәт, ололар нәсихәте аша бай тәжрибә туплап, замандаштарына фәһемле, хисле, төплө шиғырҙарын арнаны.

Ҡайҙалыр ҡунаҡҡа ғына илһам йыйырға киткәндер Наилә апай, уны һаман да эргәбеҙҙә кеүек тоябыҙ. Йәнең Йәннәттә, урының ожмахта, фәрештәләр рухташ булһын!

**Тылсымлы ла булды балҡышың**

Яҙҙарыңа ҡоштар осорҙоң да,
Киттең үҙең ҡоштар юлынан.
Хушлаштың да, гуйә, ваҡытлыса,
Күңел иңрәп тора һағыштан.

Көтмәгәндә килгән яуыз ҡунаҡ
Мәкер, сире менән ауланы.
Күҙ ҡамашып торған яран гөлдөң
Тамырҙарын өтөп айманы.

Етемһерәп ҡалды барыһы ла,
Күңел офоғонда тик бушлыҡ.
Көләс йөҙөң, рухи мираҫыңдан

Матурлыҡҡа һәйкәл ҡуйырлыҡ.

Әллә өнмө, әллә төш булдымы,
Аҙ белеп тә ныҡлап яраттыҡ.
Был юғалтыу ифрат тетрәндерҙе;
Юғалттыҡ бит һине, юғалттыҡ...

Китапханабыҙҙың нуры ла һин үҙең,
Тылсымлы ла булды балҡышың.
Йондоҙҙарҙан сәләм - нурҙар һибеп,
Ожмахтарға инеп барышың.

**63. Күсмәева, Мәрйәм. Сәскәләргә ғашиҡ ине / М. Күсмәева. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2020. - 27 март. - Б. 7.**

«Мәләүез таңдары» әҙәби берекмәһенең иң әүҙем ағзаларының береһе Наилә Әйүпова февраль иртәһендә мәңгелеккә күҙен йомдо.

Ойошмабыҙҙа 15 йыл ижад ҡаҙанында ҡайнап, ул «Ҡатын - ҡыҙ күңеле», «Алмағасым көҙөн сәскә атты», «Яҙҙарыма ҡош осорам» исемле шиғри йыйынтыҡтар сығарҙы, әҫәрҙәре күп һанлы гәзит - журналда баҫылды, халыҡ алдында йыш сығыш яһаны, интернетты үҙ итте.

Наилә апайҙың тормошто, сәскәләрҙе яратыуы һоҡландыра ине. Йортон гөл-сәскәгә күмеп, хәләл ефете Рәсүл ағай менән ике ҡыҙ үҫтереп, ейән - ейәнсәрҙәренә һөйөнөп, дәртләнеп донъя көттө. Артабан да ошолай оҙаҡ ғүмер итергә ине уйы. Әммә аяуһыҙ сир көтмәгәндә уны арабыҙҙан алып китте. Иҫтәлеккә беҙгә шиғыр, хикәйәләр, матур хәтирәләр ҡалдырҙы.

Бөгөн, Наилә Ғабдулла ҡыҙының баҡыйлыҡҡа күсеүенә 40 көн тулған көндә шиғырҙары уның сәләме булһын.

**64. Йомағолова, Фәүзиә. Ҡәләмдәшемә : шиғыр / Ф. Йомағолова. - Текст : туранан - тура // Көнгәк. - 2020. - 27 март. - Б. 7.**

## Ҡәләмдәшемә

«Апаҡайым», тиеп өндәшкәндә
Шундай назлы ине ҡарашың.
Күңелем һис ышанмай, күҙ алдымда
Һаман тере килеш ҡалаһың.

Йәйҙәр көткөн инең, ашыҡтырып
Һине ҡыштар алып киттеләр.
Моңһоу елдәр осороп юлдарына
Ынйы бөртөктәре һиптеләр.

Һин замандың йырсы ҡошо инең,
Ижадыңда дөрләп яндың да.
Күктән атылып төшкән йондоҙ кеүек,
Туҡтап ҡалдың барыр юлыңда.

Һин йәшәнең беҙҙе һокландырып,
Тирә - яғың күмеп гөлдәргә.
Ғүмерең - бер һаплам еп - өҙөлдө лә,
Ташлап киттең ҡайтмаç ерҙәргә.

Көтмәгәндә рухың күккә осто,
Беҙҙең йөрәктәрҙе яндырып,
Ғаиләңде, яҙған йырҙарыңды,
Ҡәләмеңде етем ҡалдырып.

Кем һуң ергә мәңгелеккә килгән?
Эйе, беҙ ерҙәбеҙ бөгөнгә.
Мин ышанам, һинең изге йәнең
Булырына ожмах түрендә.

# Мгновения жизни
# Ғүмер миҙгелдәрен - хәтирә



Фото на память. После презентации книги, 20 октября 2009 г.



На мероприятии в библиотеке, 5 февраля 2010 г.



С друзьями после очередного мероприятия, 18 февраля 2011 г.


Выступление на вечере поэтического настроения, 21 марта 2011 г.




После вечера, посвященного 80-летию писателю-сатирику С.Имангулову, 19 января 2012 г.




Выступление на мероприятии библиотеки, 5 марта 2013 г.



С учащимися школы №1 после поэтического вечера, 21 марта 2013 г.



Встреча в библиотеке с соратниками по перу, 21 марта 2013 г.



Выступление на  вечере, посвященном к дню матери, 28 ноября 2013 г.




С учителями татарского языка в школе №4, 20 февраля 2014 г.



С участниками литературной гостиной, 21 мая 2014 г



Фольклорные посиделки, 9 июля 2014 г.



Встреча писателей и поэтов г.Мелеуз в библиотеке, 5 февраля 2015 г.




Вечер воспоминаний с ветеранами тыла, 8 апреля 2015 г.



Встреча с писательницей Гульнур Якуповой, 14 мая 2015 г.



С учениками школы №4 после мероприятия, 13 ноября 2015 г.



На встрече с писательницей Лирой Якшибаевой, 28 ноября 2015 г.



Участие в конкурсе "Вместе дружная семья", 19 мая 2016 г.



С участниками конкурса "Вместе дружная семья" 19 мая 2016 г.



Мастер - класс по кулинарии, 5 марта 2017 г.



Вместе с соратницей по перу В. Юмагуловой в библиотеке, 12 мая 2017 г.



После презентации книги поэтессы Ф.Юмагуловой, 26 апреля 2018 г.



Памятное фото в Международный день семьи, 15 мая 2019 г.



Юбилейный вечер, 23 октября 2019 г.

**Содержание**


К читателю - уҡыусыға ........................................................................................3

**1 раздел :**

**Жизнь достойная песни – Йырға тигеҙ тормош**

*На башкирском языке - Башҡорт телендә*

1. Булатова, Әлиә. Шиғырҙарым минең серҙәштәрем.....................................6
2. Бәхетлемен һиндә тыуғанға...: ҡаурый ҡәләм.............................................10
3. Ильясова, Венера. Донъя ҡото - хеҙмәт : өлгөлө йорт...............................14
4. Ҡотлогилдина, Зөһрә. Алмағастар көҙ ҙә сәскә ата... .................................17
5. Әбдрәжәпова, Зөлхизә. Күҙҙәрендә яҙҙар тыуҙырыусы.............................21
6. Әйүпова, Наилә. Халыҡ күңелен уятыусы.................................................23

*На татарском языке - Татар телендә*

7. Галикәева, Резеда. Нурлы Наилә бит, ул!..................................................24
8. Галикәева, Резеда. Яшьлек үткән, ә күңелдә яз... .....................................26

**2 раздел :**

**Талант, заложенный Природой – Тәбиғәттән килгән был талант...**

9. Исхакова, Назима. Лучезарно сияющее творчество Наили Аюповой......31
10. Кусмаева, Марьям. «Расцетала яблоня осенней порой» ..........................32
11. Кусмаева, Марьям. Эта загадочная женская душа....................................34

*На башкирском языке - Башҡорт телендә*

12. Аҡбутина, Әлфиә. Бай ябайлыҡ..................................................................35
13. Күсмәева, Мәрйәм. Ҡатын - ҡыҙҙың сихри донъяһы: Яңы китап сыҡты.41
14. Сибәғәтуллина, Рәфилә. Һеҙ әле лә бергә, һеҙ әле лә матур......................42

*На татарском языке - Татар телендә*

15. Әюпова-Рәжәпова, Наилә. Күңел ача яшьлек яланына............................43
16. Матбуғатта баҫылған шиғырҙар, хикәйәләр - стихи, рассказы напечатанные в периодической печати........................................................46

**3 раздел :**

**Навсегда останется в наших сердцах – Күңелдәрҙә ҡалды үрелеп**

17. «Көнгәк» гәзите редакцияhы. Хәтер.............................................................50

18. Шәйәхмәтова, Хәлиҙә. Һөйөү менән һуғарылған ижад..............................52

19. Ҡотлогилдина, Рәзилә. Йәнең Йәннәттә, урының ожмахта булһын ........53

20. Күсмәева, Мәрйәм. Сәскәләргә ғашиҡ ине.................................................55

21. Йомағолова, Фәүзиә. Ҡәләмдәшемә : шиғыр.............................................56

**4 раздел :**

**Мгновения жизни - Ғүмер миҙгелдәрең - хәтирәлә** *(памятные фотографии)*.......................................................................................... 57